✔ **ИҒТИБАР! Уҡыусыларыбыҙҙы 6 ноябрҙә 19 сәғәттә баш ҡаланың "Нефтсе" мәҙәниәт һарайына саҡырабыҙ: унда "Киске Өфө" гәзите ойошторолоуҙың 10 йыллығына арналған ижад кисәһе үтәсәк. Сценарий авторы Зөһрә Бураҡаева, режиссер Хөрмәт Үтәшев, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары тарафынан әҙерләнгән матур тамашала күтәп ҡалабыҙ.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 йыл

3 - 9 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№44 (514)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Эт өрөр…**

каруан барыр



4-5

**Өфө ҡалаһында…**

иң тәүгеләрҙән булып йәшәүселәр башҡорттар була



6-7

**Аҡмуллабыҙ тере булып, Өфөгә килһә…**



8-9 атының башын тәүҙә, моғайын, "Киске Өфө"гә борор ине

**Сәләм биреү**

етмеш сауапҡа тиң



11

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Хәҙерге заман күҙлегенән ҡарағанда, "Киске Өфө" гәзите милләтебеҙҙең ижтимағи фекер үҫешендә ниндәй роль уйнай, тип уйлайһығыҙ?

***Азамат ЮЛДАШБАЕВ, "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире:*** Иҫке аҡыл яңы ҡалыптарға һыймай. Ике быуат араһы... Һынылышлы йылдар. Боролошло дәүерҙә урталайға һынған ҡоролоштар. Илдәр тарҡала, дәүләттәр ҡыйрала, табынған ҡиблалар ҡыйыш булып сыға, инанған идеалдар томан һымаҡ тарала. Батшаларҙың баштарында ла, шәхси күңелдәрҙә лә аныҡ маҡсаттар, тәғәйен тарафтар юҡ. СССР тигән мәмләкәт, йөйҙәренән бүҫелеп, ямауҙарынан һүтелеп, сәйәси картанан юҡҡа сығыу менән, һәр халайыҡ үҙенең милләте , тарихы, ғорурланырлыҡ шәхестәре, даны барлығын иҫенә төшөрөп, яңы быуатҡа ышанырлы аҙымдар менән килеп инде. Шул иҫәптән башҡорттар ҙа. Шаулап ҡоролтайҙар үтте, матбуғат яңы һулыш алды, сәхнәләрҙә, майҙандарҙа милли көйҙәр яңғырай башланы. Яңы замандың барлыҡ атрибуттары ла һаҡланды һымаҡ...Тик аҡыл иҫке бит һуң. Тәбиғи, яңы аң, яңы ижтимағи фекергә, яңы башҡорт тарихын өйрәнеүгә ихтыяж килеп тыуҙы. Унан ғәйере, ана шул ихтыяждарҙы барлап, яңы фекерҙәрҙе туплап, трансляциялап тороусы көскә зарурлыҡ ҙур ине.Тап ошо оло миссияны, ҙур яуаплылыҡты, изге бурысты үҙ иңенә алды ла инде "Киске Өфө" гәзите. Һәм бына 10 йыл дауамында үҙе һайлаған юлынан тайпылмайынса, билдәләгән концепцияһынан ситләшмәйенсә, маҡсатына тоғро ҡалып килә.

Был баҫманың миссияһы, яуаплылығы һәм бурысы нимәнән ғибәрәт һуң? Бер яҡтан, алдынғы ҡарашлы милли зыялыларҙы үҙ тирәһендә туплап, уларҙан урынлы, ваҡытлы һәм ҡайһы саҡ хатта йүнәлешле һүҙ әйттереүендә. Икенсе яҡтан, мөхәрририәттең үҙенең туҡтауһыҙ, арыуталыуһыҙ шул милли ижтимағи аңды генерациялап тороуында; ил ғәме, халыҡ хәстәре, милләт яҙмышы менән йәшәүендә. Өсөнсөнән, гәзитебеҙҙең баһаһы мәңгелектең ошо ун йыллыҡ ҡыҫҡа ғына арауығында үҙен аңлаған, һанлаған, баһалаған һәм уға тоғро ҡала килгән уҡыусыларының торған һайын арта барыуында ла күренә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ХАЛҠЫМ ҒӘМЕ МЕНӘН...

## бәйләй бит ул беҙҙе

**"Киске Өфө" гәзите менән күңелдә тыуған шатлыҡтар, шулай уҡ борсоған һорауҙар буйынса ла ихлас уртаҡлаша алыуым менән бәхетле мин. Гәзитте уҡып, күңелдә тыуған тойғолар хаҡында яҙғым килә, һәр мәҡәлә мәғлүмәт тә бирә, холоҡ-фиғелендә лә тәрбиәләй, ә иң мөһиме - йөрәккә үтеп инә. Бына ни өсөн кәрәк беҙгә "Киске Өфө".**



**Күңелемдең, йөрәгемдең халҡым ғәме, халҡым аҡылы менән бәйләнештә булыуына өлгәштергән "Киске Өфө"гә оло әсә рәхмәтен белдереп ҡалам.**

**Хәсрә РЫҪБАЕВА,**
**Баймаҡ районы Ғәҙелбай ауылы.**

***"Киске Өфө" шәхсән минең өсөн:***

*Күңелем аҡылы*
*Күңелем күҙгөһө*
*Күңелем яҙҙары*
*Күңелем нурҙары*
*Күңелем йомартлыҡтары*
*Күңелем йырҙары*
*Күңелем тулыуҙары*
*Күңелем теләктәре*
*Күңелем һиллектәре*
*Күңелем һөйөнестәре*
*Күңелем ашҡыныуҙары*
*Күңелем йыуаныстары*
*Күңелем яралары*
*Күңелем тулҡынланыуҙары*
*Күңелем ышаныстары*
*Күңелем ораны*
*Күңелем фекере*
*Күңелем өлгөһө*
*Күңелем фәһеме*
*Күңелем теләбе*
*Күңелем тыуҙемлеге*
*Күңелем сыҙамлығы*
*Күңелем фарманы*
*Күңелем мәғәнәһе*
*Күңелем танһыҡтары*
*Күңелем ҡиблаһы*
*Күңелем ҡояшы*
*Күңелем өмөттәре*
*Күңелем хәтирәләре*
*Күңелем һағыштары*
*Күңелем борсолоуҙары*
*Күңелем сәмдәре*
*Күңелем ғәмдәре*
*Күңелем көҙҙәре*
*Күңелем уйҙары*
*Күңелем әрнеүҙәре*
*Күңелем ырыҫ-ҡото*
*Күңелем намыҫы*
*Күңелем выжданы*
*Күңелем ғорурлығы*
*Күңелем сабырлығы*
*Күңелем даръяһы*
*Күңелем ғәйрәте*
*Күңелем бураны*
*Күңелем дарманы*
*Күңелем дәрте*
*Күңелем имәны*
*Күңелем рәхмәте*
*Күңелем сауабы*
*Күңелем күрке.*

*✓ Был баҫмалағы барлыҡ мәҡәләләрҙе лә уҡырға тура килә. "Киске Өфө" ҡарап сыға торған баҫма түгел, уҡып сыға торған баҫма. "Ҡомар" битендәге хикәйәләрҙе, повестарҙы береһен дә ҡалдырмай уҡып барам.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЙЫЯМ ДА, ҺАТАМ...



**Республикабыҙ иҫ киткес матурлығы менән генә түгел, ә тәбиғи байлығы менән дә һушты китәрерлек. Иртә яҙҙан башлап, ҡара көҙгәсә урман-ҡырҙарҙа төрлө емеш-еләк йыйырға була. Кемдер был муллыҡты бары тик үҙе өсөн генә ҡулланһа, икенселәр һатыуға ла сығара. Мин дә еләк-емеш йыйып һатырға яратам, сөнки, беренсенән, был ысул бер аҙ аҡса эшләү мөмкинлеге бирһә, икенсенән, төрлө кеше менән аралашыу, танышыу үҙе бер шатлыҡ.**

Мин үҙем бик тә аралашыусан, үҙемә уңышты йәлеп итеүсән кешемен. Шуға күрә һатырға алып барған әйберемде һатмайынса ҡайтҡаным юҡ. "Эшҡыуарлыҡ" өлкәһендә күптән эшләгәс, хәҙер инде үҙ клиенттарым да барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, иртә яҙҙа бер-нисә ғаиләгә ҡайын һуты йыйып бирәм. Бер мәшәҡәте лә юҡ, ә әҙме-күпме килем килә. Әлбиттә, был эшмәкәрлегемде атҡарған ваҡытта, тәү сиратта, тәбиғәткә зыян килтермәй эш итәм һәм ағас ҡоромаһын өсөн барлыҡ ҡағиҙәләрҙе лә теүәл үтәйем. Тәбиғәткә рәхмәтле була белергә кәрәк икәнлеген хәтерҙән сығарырға ярамай.

Артабан еләк, муйыл, дарыу үләндәре һәм башҡа төрлө тәбиғәт байлыҡтары йыйып һатыуға сығарам. Хәҙер сират бәшмәккә етте. Бер аҙна эсендә ике тапҡыр Өфөгә гөрөздә алып киләм һәм бер сәғәт тирәһендә һатып бөтөп ҡайтып та китәм. Килограмына 40 һум һорайым һәм бер килгәндә 800-1000 һум аҡса эшләйем. Әлбиттә, һатыу иткәндә транспорт кеүек проблема булмаҫҡа тейеш, сөнки автобус менән, ҡулға ауыр сумкалар тотоп, әллә ни ыратып булмай. Был йәһәттән миңә улым ярҙам итә. Урманға ла, ҡалаға һатырға ла алып йөрөй. Шулай итеп, яҙ-көҙ айҙарында тупланған аҡсаға өйгә төрлө кәрәк-яраҡ һатып алабыҙ.

**Сәкинә МОРТАЗИНА.**
**Благовещен районы.**

# ТӘРЖЕМӘСЕ КӘРӘКМЕ?

**Юғары уҡыу йорттарының береһендә бишенсе курста белем алам. Буласаҡ һөнәрем - сит телдәр белгесе. Университетта инглиз телен өйрәнәм, ә Үзбәкстанда тыуып, хәҙер Өфөгә йәшәргә күскән туғанымдан үзбәк телен үҙләштерҙем. Барлыҡ был оҫталығым миңә арыу ғына аҡса эшләргә мөмкинлек бирә.**

Беренсе курсты тамамлағас уҡ аҡса табыу юлдарын эҙләй башланым. Эҙләгән - таба һәм бөгөнгө көндә минең юлға һалынған, даими аҡса килтереп тороусы сығанағым бар. Ул - сит телдәрҙән төрлө текст, документ һәм башҡаларҙы тәржемә итеү. Беренсе клиенттарым - курсташтарым һәм минән түбән курста уҡыусы студенттар. Сит телдәр факультетында уҡыһалар ҙа, барыһы ла өйгә эште үҙҙәре башҡармай, ә миңә килтерә. Шулай итеп, улар миңә айына байтаҡ ҡына аҡса "килтереп тоттора". Тағы ла үзбәк телен белеүем дә бик ярап ҡала, сөнки республикаға бихисап үзбәк халҡы эшкә килә, ләкин күбеһе урыҫ телендә аралашмай. Улар менән бергә Миграцион хеҙмәт идаралығына барам һәм ундағы хеҙмәткәрҙәр менән сит ил граждандары араһында тәржемәсе ролен үтәйем. Шулай уҡ төрлө документтар тултырғанда ла минең хеҙмәттәрем ярап ҡала. Ә үзбәктәрҙең Өфөгә көн дә килеп тороуын иҫәпкә алғанда, минең килемдең дә арыу ғына икәнлеген аңлау ауыр түгел. Әлбиттә, бындай эшмәкәрлегемде, тәү сиратта, уҡыуыма зыян килтермәҫтәй итеп ҡорам, шуға күрә уҡыуҙа ла проблемалар юҡ.

**Зәлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Хәҙерге заман күҙлегенән ҡарағанда, "Киске Өфө" гәзите милләтебеҙҙең ижтимағи фекер үҫешендә ниндәй роль уйнай, тип уйлайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, педагог:*** Милләтебеҙҙең ижтимағи фекер үҫешендә "Киске Өфө"гәзитенең роле баһалап бөткөһөҙ. Башҡа бәғзе бер баҫмалар кеүек, ул теге йәки был мәғлүмәтте теркәп ҡуйыу менән генә сикләнеп ҡалмай, бәлки, хәл-ваҡиғаларҙың ни өсөн һәм ниңә икәнлеген ентекле аңлатып йә баһалап бирә, сөнки гәзит уҡыусыларҙың кимәле төрлө бит. Ошо йәһәттән гәзит төрлө һөнәр, төрлө даирә кешеләре өсөн дә берҙәй үк аңлайышлы һәм яҡын. Гәзиттең популярлығы тураһында уның тиражы һөйләй, тиһәләр ҙә, "Киске Өфө"нө уның тиражында күрһәтелгәндән биш-алты тапҡырға күберәк кеше уҡый, тип уйлайым. Сөнки , беренсенән, уны ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡығандарын беләм. Икенсенән, гәзитте өйөнә алдырған ғаиләнең эсендә генә лә күпме кеше бар, шуларҙың бөтәһе лә уны уҡый. Ғөмүмән, районларға сыҡһаң, һәр кемдең телендә - "Киске Өфө" һүҙе, әйтерһең, бар донъя уны ғына уҡыған һымаҡ тойолоп китә хатта.

"Киске Өфө" гәзите данлы һәм шанлы тарихыбыҙ, ҡаһарман рухлы геройҙарыбыҙ, зирәк аҡыллы әүлиәләребеҙ хаҡында һөйләп, халҡыбыҙҙың милли аңын һәм ғорурлығын үҫтереүҙә бер маҡтаулы эш башҡарһа, редакция ҡорона билдәле, абруйлы шәхестәрҙе - сәйәсмәндәрҙе, дәүләт эшмәкәрҙәрен, эшҡыуарҙарҙы, ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы, алдынғы ҡарашлы йәштәребеҙҙе саҡырып, улар менән заманыбыҙҙың иң көнүҙәк мәсьәләләре буйынса "Диалог" һәм "Монолог"тар ойоштороп, теге йәки был хәл-ваҡиғаға беҙҙең күҙебеҙҙе аса һәм ижтимағи аң кимәлебеҙҙе үҫтереүгә өлгәшә. Миңә уҡытыусылар менән йыш осрашырға тура килә. Улар араһында ҡайһы саҡ ил, республикабыҙҙағы бөгөнгө хәл-торош менән әллә ни хәбәрҙар булмағандары ла осрап ҡуя. Шул саҡ мин уларға: "Әгәр халҡыбыҙ тарихы, уның героик шәхестәре хаҡында күберәк белергә теләһәгеҙ, бөгөнгө сәйәсәт, һәр төрлө реформалар айышына төшөнөргә теләһәгеҙ, илһөйәр рухлы балалар тәрбиәләргә уйлаһағыҙ, мотлаҡ "Киске Өфө" гәзитен алдырып, һәр битен, һәр мәҡәләһен уҡып барыуығыҙ ҙа етер ине", - тип әйтеп ҡуям, сөнки "Киске Өфө" - ул ысын мәғәнәһендә халыҡ фекерен туплаусы трибуна ғына түгел, ижтимағи фекер ҡеүәһен алға һөрөүсе лә .

***Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА, Стәрлетамаҡ ҡалаһы "Ашҡаҙар" гәзитенең баш мөхәррире:*** "Киске Өфө"гәзите минең күҙ алдына ағинәй образында килеп баҫа, сөнки ул уҡыусыһын тормошсан кәңәштәре, төплө һәм аҡыллы фекерҙәре менән тәрбиәләп кенә ҡалмай, ә тарихи тамырҙарыбыҙҙы барлап, халҡыбыҙҙың данлы үткәнен, уның ошо юҫыҡтағы әлегә тиклем билдәһеҙлектә ҡалып килгән яңы биттәрен асып, аңыбыҙҙы яҡтыртыусы, күңелдәрҙә милли ғорурлыҡ уятыусы ла ул. Ошо гәзит арҡылы беҙ бик күп онотолғандарҙы иҫкә төшөрҙөк, белмәгәндәребеҙҙе асыҡлап, зиһен төпкөлөбөҙгә һалып ҡуйҙыҡ. Ә инде туған тел һәм тарих уҡытыусыларының өҫтәл баҫмаһына әүерелде гәзит - йәш быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләү буйынса бик тә кәрәкле һәм башҡа бер ерҙә лә баҫылмаған мәғлүмәттәр, бай өҫтәмә материал табырға була уның һәр һанында. Тәүге битенән үк фекер төйнәргә, ижтимағи фекерләүҙе үҫтерергә өйрәтә гәзит, беҙ быны "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында ла күрәбеҙ. Халҡыбыҙҙың алдынғы ҡарашлы, ҡыйыу һәм тура һүҙле зыялыларының сығыштары күп мәсьәләләргә күҙҙе аса, аң даирәһен киңәйтә. Элегерәк хатта шәжәрәләрен дә белмәгән, тарихыбыҙға битараф, рухһыҙ булған ҡайһы берәүҙәрҙең "Киске Өфө" гәзитен уҡып, үҙ асылына, тормошҡа ҡараштарын ҡырҡа үҙгәрткәндәрен беләм. Миңә гәзиттең сығыштары ҡоро риторикаға түгел, ә аныҡ дәлилдәргә ҡоролоуы оҡшай. Мәҫәлән, мәсьәлә шулай ҡуйыла: исемдәре тарих ташына уйылған шәхестәребеҙ, батырҙарыбыҙ мәңгелеккә беҙҙең йөрәктәрҙә, ләкин бөгөнгө көн геройҙары ла бик кәрәк беҙгә, ҡайҙа улар? Шунан "Киске Өфө" үҙ өлгөләрендә йәштәребеҙҙе эйәртерлек аҡыллы, талантлы, матур, көслө һәм, иң мөһиме, рухлы егеттәребеҙ хаҡында матур-матур мәҡәләләр баҫып сығара. Улар араһында үҙебеҙҙең Башҡортостанда һәм Мәскәүҙә уҡып, эшләп йөрөүселәр ҙә, Америка тарафтарында дан яулағандары ла, Лондонда уҡып йөрөүселәр ҙә - һәммәһе бар. Гәзиттең бындай сығыштары, иманым камил, йәштәрҙә генә түгел, һәр башҡортта үҙ милләте менән ғорурланыу тойғоһо тыуҙырмай ҡалмай. Тимәк, гәзитебеҙ сағыу һәм аныҡ өлгөләр аша камиллыҡҡа әйҙәй, яңыса һәм позитив фекерләргә өйрәтә, шуның менән милләтебеҙҙең заманса йөҙөн, характерын булдырыуға өлгәшеүҙе маҡсат итеп ҡуя.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# АРАЛАРҘЫ ЯҠЫНАЙТА

**Гәзитте сыға башлағандан алып уҡыйым, ул тормошомдоң айырылмаҫ бер өлөшөнә, йәменә, ғаиләмдең бер ағзаһына әүерелде.**

Беҙҙең ауылдан Өфө 600 саҡрым самаһы алыҫлыҡта. Шуға күрә гәзит беҙгә шишәмбе көн генә килеп етә. Гәзитте уҡыһам, бына ошондай алыҫ аралыҡ минең өсөн юҡҡа сыға һымаҡ: үҙемде баш ҡала, республика, башҡорт милләте кешеһе итеп нығыраҡ тоя башлайым. Былар барыһы ла "Киске Өфө"нөң рухлы баҫма булыуынан киләлер, тип уйлайым. Элегерәк Таһир ҡусты Ишкининдың мәҡәләләрен яратып уҡый торғайным. Әммә, ниңәлер, уның фамилияһы гәзиттә күренмәй башланы. Уның ҡарауы, "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһындағы төрлө кешеләрҙең яҙғандары миңә әлеге ҡатмарлы донъяның күп кенә мәсьәләләрен аңларға ярҙам итә. Гәзит килгәс тә, шунда уҡ эскәмйәгә ултырып, ошо рубрикалағы фекерҙәрҙе уҡып сығам да, артабан яйлап, бер-бер артлы тотош гәзитте уҡып сығам.

Шуныһын да әйтергә кәрәк: был баҫмалағы барлыҡ мәҡәләләрҙе лә уҡырға тура килә. "Киске Өфө" ҡарап сыға торған баҫма түгел, уҡып сыға торған баҫма. "Ҡомар" битендәге хикәйәләрҙе, повестарҙы береһен дә ҡалдырмай уҡып барам.

**Иҙрис ИСҠУЖИН.**
**Хәйбулла районы Йәнтеш ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә үткән "Гражданлыҡ йәмғиәтен һәм территорияларҙы үҫтереү факторы булараҡ халыҡ-ара хеҙмәттәшлек һәм халыҡ дипломатияһы" республика форумы һөҙөмтәһендә Башҡортостанда Халыҡ-ара хеҙмәттәшлек ассоциацияһы ойошторолдо. Ассоциацияға туғыҙ Дуҫлыҡ йәмғиәте индерелде. Республика форумында ҡатнашыусылар Дуҫлыҡ йәмғиәттәренең Координация советын булдырҙы.

✓Өфөлә "Федераль контракт системаһы - конкурентлы Рәсәйҙең үҫеш нигеҙе" темаһына Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы эшләне. Уны ойоштороусылар булып Рәсәйҙең Иҫәп палатаһы һәм Башҡортостан Хөкүмәте сығыш яһаны. Сарала Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, Иҫәп палатаһы рәйесе Сергей Степашин ҡатнашты. Федераль контракт системаһы тураһындағы закон проектын камиллаштырыу мәсьәләләре буйынса профессиональ диалог алып барыу өсөн майҙансыҡ булдырыу йәһәтенән был тәүге тәжрибә булып тора.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе, сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштарыбыҙ эштәре һәм халыҡ-ара гуманитар хеҙмәттәшлек буйынса федераль агентлыҡ етәксеһе урынбаҫары Георгий Мурадов менән эш осрашыуы үткәрҙе. Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, был агентлыҡ Башҡортостанды популярлаштырыу йәһәтенән төбәккә ҙур ярҙам күрһәтә ала. Георгий Мурадов билдәләүенсә, агентлыҡ Башҡортостанға иҡтисад, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәләрендә сит илдәр менән мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү йәһәтенән булышлыҡ итергә әҙер.

✓Республика Президенты Рөстәм Хәмитов һәм Японияның Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Тикахито Харада Башҡортостан менән Японияның хеҙмәттәшлек итеүе тураһында һөйләшеүҙәр үткәрҙе. Президент һәм Илсе ике яҡлы хеҙмәттәшлек сиктәрендә тормошҡа ашырыласаҡ бер нисә проектты тикшерҙе. Атап әйткәндә, республикала акрил кислотаһы һәм этилен етештереү буйынса заводтар төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итте. Шулай уҡ яҡтар Өфөлә сүп-сар эшкәртеү буйынса завод төҙөү мөмкинлектәрен тикшерҙе.

✓Башҡортостанға урман янғындарын һүндереү техникаһы һәм махсус ҡорамалдар һатып алыуға 66 миллион 843 мең 200 һум күләмендә федераль субсидия бүленәсәк. Был средстволарға төбәктә 35 берәмек махсус техника һатып алынасаҡ.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

**Космополит һүҙе боронғо грек телендә "донъя гражданы" тигәнде аңлата.**
**Космополиттар дөйөм кешелек мәнфәғәттәрен һәм ҡиммәттәрен айырым милләттекенән өҫтөн ҡуя. Уларҙың милләте юҡ. Был йәһәттән космополиттарҙы ностратик, йәғни кешелектең әле милләттәргә бүленмәгән дәүере граждандары тип тә атарға мөмкин булыр ине. Тимәк, космополит төшөнсәһенең яңы варианттағы аңлатмаһы ла барлыҡҡа килде: "Космополит - ностратик дәүер гражданы". Тимәк, һуңғы ваҡыта күҙәтелгән интеграция, глобалләшеү күренештәре милләттәрҙе инҡар итеүгә, ностратик дәүергә кире ҡайтыуға йүнәлтелгән.**
**Космополитизм төшөнсәһен өйрәнә торғас, үҙемә тағы ла бер яңылыҡ астым: баҡтиһәң, космополит (беҙҙенсә - маңҡорт йәки ике милләт араһында тороусы һәм уларҙың береһен дә ҡабул итмәүсе маргиналдар) кешеләрҙән тыш космополит үҫемлектәр һәм космополит йәнлектәр һәм ҡоштар ҙа була. Бына һиңә кәрәкһә...**

# ҮЛӘН...
## үҫкән ерендә генә үҫә



Ер шарының һәр ҡитғаһында ла үҫеүсе космополит үҫемлектәр араһында иң ныҡ таралғаны ҡый үләндәре икән. Халыҡта уны сүп үләндәре тип тә атайҙар. Сүп үләндәрен беҙ түтәлдән йолҡоп ташлайбыҙ һәм уларҙың күбеһе хатта малға ашатыр бесән ролен үтәргә лә яраҡһыҙ. Сүп үләне йомшартылған, ашланған һәм һуғарылған тупраҡта сәселгән үҫемлектән алда үҡ килеп сығырға өлгөрә, уларға әрәмтамаҡлыҡ хас. Космополит үҫемлектәргә шулай уҡ бәпкә үләне, ҡыяҡ үлән, бер йыллыҡ һыуҙа һәм һаҙлыҡта үҫә торған үләндәр, һыу ебәге, екәнле ҡамыш, тәлмәрйен тәңкәһе, ҡыяҡ үләне, көтөүсе муҡсаһы һәм ҙур юл япрағы инә. Ә космополит йәнлектәргә һәм ҡоштарға килгәндә, улар барыһы ла кешенең йәшәү шартына яраҡлашҡан өй себендәре, йорт турғайҙары һәм ҡомаҡтарҙың бер нисә төрө.

Космополит үҫемлектәрҙе, йәнлектәрҙе һәм ҡоштарҙы берләштереүсе уртаҡ сифаттарҙы билдәләгәндә иң тәүҙә әрһеҙлек, ҡаратырышлыҡ һәм яраҡлашыу тип әйтергә мөмкин булыр ине. Ысынлап та, ниндәй генә төр булмаһын, әгәр ҙә ул Ер шарының һәр ҡитғаһының климат шарттарында һаҡланып ҡалырға теләһә, тап ошо сифаттарға эйә булырға тейештер ҙә улар. Әйткәндәй, космополит был төрҙәрҙең күбеһе һәр ҡитғала ла һаҡланып ҡалыу һәм үрсеү маҡсатында тереклек өсөн иң кәрәклеһе булған дымлы һәм йылы урынды һайлай, кешеләргә, улар йәрәгән юлдарға (әйтәйек, ҡый үләне, бәпкә үләне, юл япрағы) яҡынайраҡ булырға тырыша. Әйтеүебеҙсә, йорт себене, йорт турғайы һәм ҡомаҡтар фәҡәт кеше янында ғына, уларҙың йылыһында һәм аҙыҡ ҡалдыҡтары менән туҡланып ҡына көн күрә ала.

Тимәк, уларҙың төп сифаты - яраҡлашыу. Шул уҡ ваҡытта былар сығып шундай һығымта яһарға булалыр: әрһеҙлек, ҡаратырышлыҡ һәм яраҡлаша белеү генә һәр ваҡытта ла яҡшы сифатлы булыуҙы билдәләмәй. Йә әйтегеҙ, юл япрағы һәм көтөүсе муҡсаһынан башҡа ҡайһы космополит төрҙән кеше өсөн файҙалы булғаны бар? Минеңсә, улар тап йәшәргә яраҡлашыу арҡаһында, ҡасандыр сифатлы һаналған үҙ асылдарын юғалтып, ошо рәүешә алғандарҙыр. Әйтәйек, йорт себене ошо маҡсатта тыштағы себендән йорт себененә, йорт турғайы ҡыр турғайынан, ҡомаҡтар ҡыр сысҡандарынан барлыҡҡа килгән. Шул уҡ бүренән эт нисек барлыҡҡа килһә, былар ҙа шундай уҡ регрессив юл үткән, ҡыҫҡаһы, үҙ асылдарын юғалтҡан. Шул уҡ ваҡытта космополит үҙ алдына, тик үҙенә генә таянып тереклек итергә һәләтле түгел, уға төп төрҙәргә ҡарағанда әрәмтамаҡлыҡ күберәк хас. Сөнки космополит - ул үҙ сифатына эйә төр түгел. Ғөмүмән, космополит төшөнсәһенең төп мәғәнәһе лә асылды юғалтыуға барып ялғана. Кешеләр араһындағы космополиттарға ла ҡағыла был аңлатма.

Алда иҫкә алған Илдар Ғәбитов әйткәнсә, үҙаҡлаштерелгән йылытыу селтәрҙәре булмаған йәгени һәр яҡтан комфортлы йәшәү шарттары барлыҡҡа килтереүселәр араһында космополит кешеләрҙең күберәк осрауын хатта ошолай космополит үҫемлектәр, йәнлектәр, себендәр, ҡоштар миҫалына таянып та аңлатып була, минеңсә. Үлән үҫкән ерендә генә үҫә, ә үҫмәгән ерендә үҫкәне, яраҡлашҡаны, тимәк, космополит үлән булып сыға инде.

Беҙҙең эраға тиклем йәшәүсе грек философы Геродот үҙенең "Тарихтар" китабының IX томында (122-се бит) шундай фекер әйтә: "...Ә бит ул бай һәм мул тормошло илдәрҙә ғәҙәттә кешеләрҙең һәлкәү һәм иркәсел булыуы хаҡында әйткәйне. Бер үк илдә бер үк ваҡытта ауыҙ һыуы ҡоролоҡ татлы емештәр үҫә һәм батыр яугирҙар тыуа алмай. Быны белгән фарсылар Кирҙың фекере менән килешеп, үҙ ниәттәренән баш тартты. Улар байлыҡтан һығылып торған тигеҙ урында ҡол булып йәшәүҙән фәҡир, ер байлыҡтары ҡойто урында башҡа халыҡтар өҫтөнән хакимлыҡ итеп йәшәүҙе өҫтөн күрҙе..."

Ошо урында халҡыбыҙҙың тағы ла бер "Ас тамағым - тыныс ҡолағым" тигән әйтеме иҫкә килеп төшә. Әлбиттә, ҡол кешенең ҡолағы тыныс булмайҙыр бит. Ә бит Геродоттың был әйткәндәрен тарих һәр дәүер һайын иҫбатлап тора. Илдар Ғәбитов әйтеүенсә, Евразияның иң һалҡын илендә йәшәүсе монголдарҙы ғына алайыҡ. Әйткәндәй, осһоҙ-ҡырыйһыҙ далала һибелеп көн итеүсе был халыҡ ҡәбиләләре элек-электән һәм хәҙер ҙә яҡшы тәбиғәт шарттарында, емешләккә, тәбиғәттең башҡа ер өҫтө һәм ер аҫты байлыҡтарына мулығып көн итмәгән һәм итмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, гәйрәтле булыу йәһәтенән үткән мең йыллыҡта донъя халыҡтары араһында монголдар үҙ халҡын яҡлар һәм һаҡлар дәүләт кенә түгел, ике ҡитғаны бер иткән империя төҙөй алыуы менән айырылып тора. Әйткәндәй, дәүләтселек эшенә урыҫтар монголдарҙан өйрәнеп ҡала. Алтын Урҙа тарҡалып юҡҡа сыҡҡас, монголдарҙың көнсығыштан көнбайышҡа табан яулап алыу хәрәкәте Иван Грозный тарафынан кире йүнәлеш ала. Ҡыҫҡаһы, был Евразияның империялар тарихына бәйле бер ҡыҫҡа ғына өлөшө. Монголдарҙан күпкә алдараҡ һундар, аландар, бәшәнәктәр, ҡыпсаҡтар ике ҡитғаны бер иткән. Империяларҙың һуңғыһы Советтар Союзы ине, әлегә Евразияның был "вакантлы" урыны буш ҡала килә. Рәсәйҙең дә империя булған сағы тарихта ғына тороп ҡалды, хәҙергеһе уның һағымы ғына.

Шулай итеп, әгәр ҙә монголдар һауа шарттары тереклек өсөн ҡулай булған ерҙә йәшәгән булһа, беҙ ошондайын империялар барлыҡҡа килеүе һәм юҡҡа сығыуы тарихына шаһит була алыр инекме? Юҡтыр, тием, сөнки, Геродоттың фекерен башҡорт халыҡ әйтеме менән яраштырып әйтһәк, шундайыраҡ яңы әйтем килеп сығыр ине: "Үлән үҫкән ерендә генә үҫә, халыҡ яҡлауға мохтаж урында ғына батыр тыуа".

"Үлән үҫкән ерендә генә үҫә" әйтеме хаҡында фекер йөрөтә торғас, логика үҫеше халҡыбыҙҙың икенсе бер әйтеменә килтереп сығарҙы. Ул да булһа, "Көн яманы китеп барыр, китмәҫ әҙәм яманы". Хәйер, был әйтем хаҡында алдағы һанда һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы. Башы 43-сө һанда).**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ИЗГЕ УЙҘАР СЫҒАНАҒЫ

**"Киске Өфө" гәзите яратҡан баҫмаларымдың береһе. Унда донъя күргән мәҡәләләрҙе энәһенән-ебенәсә уҡыйым.**

Гәзит биттәрендә тормошсан, милләтебеҙгә, рухыбыҙға, динебеҙгә, йәшәйешебеҙгә ҡағылышлы көнүҙәк мәсьәләләр күтәрелә. Әхмәр Үтәбай алып барған рубрикалар бик оҡшай. Уларҙы уҡығас, күңелемдә, нисектер, донъяға ҡарата изге уйҙар ғына тыуа, бар булмышың таҙарынып ҡалғандай була. Аҙаҡҡы биттә бирелгән "Аҡыл-ҡаҙна" рубрикаһын да уҡырға яратам. Күпселек мәҡәләләрҙең аҙағын "шулай итеп" тип дөйөмләштереп ҡуйыу ҙа үҙенсәлекле. Мәҡәләләрҙәге фекер ағышына һығымта яһала, нөктә ҡуйыла был урында.

Гәзиттең баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы беҙҙең Аҫҡын районын гелән ҡурсалап, осрашыуҙарыбыҙҙа ҡатнашып, беҙҙең саралар тураһында мәҡәләләр баҫтырып тора. Башҡорт телендәге район гәзитен өйошторған ваҡытта ла ул ҙур ярҙам күрһәтте һәм әле лә үҙенең кәңәштәренән ташламай.

**Әнзирә ҒӘНИЕВА,**
**Аҫҡын районының Тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфө "Етемдәрһеҙ ҡала" бөтә Рәсәй конкурсында 30127 тауыш йыйып, абсолют еңеүсе булды. Шулай уҡ Калининград (25730 тауыш), Мәскәү өлкәһенең Ступино ҡалаһы (13233 тауыш) һәм Дағстан Республикаһының Дербент ҡалаһы (12141 тауыш) үҙҙәренең категорияһында лидерҙар иҫәбенә инде. Бәйгелә илдең 57 төбәгенән йәмғеһе 150 ҡала ҡатнашты.

✓Башҡортостанда эш визиты менән Рәсәйҙең ауыл хужалығы министры Николай Федоров булып китте. Визит барышында ул бер нисә объектта булды. "Республиканың дүрт районын ҡарап сыҡтым һәм аграр секторҙың дөрөҫ йүнәлештә үҫешеүенә инандым, - тине Николай Федоров. - Төбәк башлығы өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙе дөрөҫ билдәләй икән, беҙ һәр саҡ ярҙам итергә әҙер". Шулай уҡ министр һүҙҙәренсә, ауыл ерендә эшләгән йәш белгестәрҙе йыл аҙағынаса торлаҡ менән тәьмин итеүгә Башҡортостан өҫтәмә рәүештә 55 миллион һум аҡса аласаҡ.

✓10-11 ноябрҙә Өфөлә тәүгә каратэ киокусинкай буйынса Рәсәй беренселеге үтә, был сара йылға йомғаҡ яһаясаҡ. Ярыштарҙа бөтә Рәсәйҙән 500-ҙән ашыу спортсы ҡатнашасаҡ. Беҙҙән республика исеменән БР Киокусинкай федерацияһынан 25 кеше сығыш яһаясаҡ. Рәсәй беренселеге "Динамо" спорт комплексында үтәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты делегацияһы ЮНЕСКО-ның "Европа диалогы" программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Франция, Германия, Швейцария илдәренә һәм Лихтенштейн кенәзлегенә барасаҡ. ЮНЕСКО-ның Париждағы штаб-фатирында "ЮНЕСКО-ның Ассоциацияланған мәктәптәре" халыҡ-ара проекты етәкселәре менән рәсми осрашыуҙар һәм һөйләшеүҙәр планлаштырылған. Сараларҙың береһендә Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназияһына һәм Салауат ҡалаһының 1-се гимназияһына "ЮНЕСКО-ның Ассоциацияланған мәктәптәре" халыҡ-ара сертификаттары тапшырыласаҡ.

✓Өфөлә "Шаяндар һәм тапҡырҙар клубы үҙәге" асылды. Баш ҡалала Шаяндар һәм тапҡырҙар клубы - ул 130-ҙан ашыу команда, улар иҡе меңгә яҡын ҡатнашыусыны берләштерә.

**"Башинформ"дан.**

*✓ "Киң аҙымдар менән атларға тырышыусының салбар төбө йыртылыуы ла ихтимал. Милләттәрҙе һәм федерализмды Прохоров уйлап сығармаған һәм уларҙы Прохоров бөтөрә алмай..."*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ДИАГНОЗ ШУНДАЙ: СӘЛӘМӘТ!

**Баш ҡала округы хакимиәтенең Иҡтисад идаралығы белгестәре квартал һайын журналистарҙы Өфөнөң социаль-иҡтисади хәле менән таныштыра. Әлбиттә, беҙҙең бурыс - был мәғлүмәтте халыҡҡа еткереү. Уҙып барған йылдың туғыҙ айы буйынса республикабыҙҙың төп мегаполисының "пульсын" түбәндәгесә ҡылыҡһырларға мөмкин.**

**Сәнәғәт.** Йылдың туғыҙ айында баш ҡалала 402,7 миллиард һумлыҡ эштәр һәм хеҙмәт күрһәтелгән. Өфө республика сәнәғәте күләменең яртыһынан күберәген тәьмин иткән (54,5 процент).

**Инвестициялар.** 2012 йылдың тәүге яртыһында ҡала иҡтисадына 32 миллиард 253 миллион һум инвестиция йәлеп ителгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда ғәмәлдәге хаҡтарҙа 42,4 процентҡа күберәк тәшкил итә.

**Төҙөләш һәм реконструкция.** Туғыҙ ай эсендә төрлө финанс сығанаҡтары иҫәбенән дөйөм майҙаны 432,9 мең квадрат метр булған бер нисә торлаҡ йорт сафҡа индерелгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 7,9 процентҡа күберәк. Был һан эсендә шәхси төҙөләш өлөшө 46,8 процент, йәғни 202,6 мең квадрат метр тәшкил итә. Йыл башынан алып 19 километр араға газ торбалары һалынған.

**Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ.** Граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан сығарып, уларҙы барлыҡ шарттары булған торлаҡҡа күсереү йүнәлешендә эш дауам итә. Ошо маҡсатта ҡабул ителгән Ҡала адреслы программаһын тормошҡа ашырыу барышында, 2008 йылдан алып бөгөнгәсә, барлығы 2,7 миллиард һум аҡса бүленгән. Программа буйынса иҫәптә торған 6217 кешенең 5923-ө уңайлыҡтары булған фатирҙарға күсерелгән. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалауға булышлыҡ итеү фонды ярҙамы менән торлаҡ йорттарҙа капиталь ремонт үткәреү, лифттарҙы алыштырыу һ.б. эштәр дауам ителә.

**Хеҙмәтләндереү.** Коммуналь комплекс предприятиелары тарафынан 9 айҙа 8,2 миллиард һумлыҡ хеҙмәт күрһәтелгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 14,8 процентҡа күберәк. Йыл башынан алып баш ҡала халҡы 81,4 миллион һумлыҡ һыу, 7,6 миллион гкал. йылылыҡ энергияһы, 168,5 миллион кубометр "зәңгәр ягыулыҡ" ҡулланған. 2472 фатирға газ индерелгән. Ғинуар-сентябрҙә, дөйөм алғанда, ҡала пассажир транспорты 207,3 миллион пассажирҙы хеҙмәтләндергән.

**Ҡулланыу баҙары.** Өфө предприятиеларының туғыҙ айҙағы ваҡлап һатыу әйләнеше былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 10,8 процентҡа артып, 253,3 миллиард һум тәшкил иткән.

**Шулай итеп, туғыҙ ай йомғаҡтары буйынса барлыҡ тармаҡтарҙа ла ыңғай динамика күҙәтелә. Әгәр Өфөнө тере организм итеп ҡараһаҡ, табиптар уның һаулығы торошон төрлө анализдарға ҡарап баһалар ине. Ә беҙ инде бөгөн күҙ һалған "анализдар" нигеҙендә баш ҡалабыҙға "сәләмәт" тигән диагноз ҡуя алабыҙ.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БОРСОЛДОРА*



**"Гражданлыҡ платформаһы" фирҡәһенең съезында билдәле эшҡыуар һәм хәҙер инде сәйәсмән Михаил Прохоров үҙ эшмәкәрлеге программаһы менән таныштырып, милли республикаларҙан баш тартырға, йәғни уларҙы бөтөрөргә саҡырҙы. Был сетерекле тема сәйәсәт көмбәҙендә әленән-әле ҡалҡып тора. Әлегәсә милли республикаларға ЛДПР лидеры Владимир Жириновский ҡаныға ине, хәҙер уның сафын тағы берәү тулыландырҙы. Бөгөн Прохоров - ил тәнендәге сир кеүек. Уны даими иҫләп, уның күтәргән "проблемаһын" ҡуйыртып торабыҙ икән, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән ошо "сир"ҙең аҙыуына, көсәйеүенә сәбәпсе булыуыбыҙ ҙа бик ихтимал. Ә инде уйлап, сиктән-сиккә бәргеләнмәй, халыҡ-ара хоҡуҡи ҡануниәтҡә һәм нормативтарға нигеҙләнеп, организмдың иммунитетын көсәйткәндә, бер "сир" ҙә ҡурҡыныс түгел. Кем әйтмешләй, эт өрөр, каруан барыр. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тап шул юлды һайланы ла инде. Республика етәкселегенең ҡарашы ла шул юҫыҡта.**

# ЭТ ӨРӨР...

## каруан барыр

**Рөстәм ХӘМИТОВ, Башҡортостан Республикаһы Президенты:** "Мин бындай сығыштарға бөтөнләй комментарий бирмәҫкә тырышам, сөнки был ҡайны бер кешеләрҙең усаҡҡа бензин һипкән осрағы. Был аҡыллы аҙым түгел. Күрәһең, Прохоров, үҙенә иғтибар йәлеп итергә тырыша. Ул ысын мәғәнәһендә лә, күсмә мәғәнәлә лә ҡеүәтле, һәләтле егет... Әммә милләт-ара татыулыҡ, республикаларҙы һаҡлап ҡалыу мәсьәләләре - ҙур булмаған партиялар, ижтимағи хәрәкәттәр съездарында фекер алышына торған тема түгел. Реакция бик киҫкен булыуы мөмкин.

Мин унан өлкән булараҡ, уға шундай кәңәш бирер инем: мөмкин булһа, был теманы ашыҡ-бошоҡ ҡына ҡарап үтергә ярамай - ул бик ҡатмарлы, киҫкен һәм киң ҡырлы. Хатта был киҫкенлекте үҙендән сығышына, съезына ҡушып ебәрергә лә ярамай. Был мәсьәләне Прохоров һәм уның "Гражданлыҡ инициативаһы" хәл итмәй. Был - хатта кемдер ниміләр буйынса фекер алышырға теләнә лә, бөтөнләй икенсе мөнәсәбәт, икенсе ҡараш талап иткән ҡатмарлы, киҫкен тема".

**Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе** Михаил Прохоровтың тәҡдимен "партия программаһы йөкмәткеһенең ярлылыҡ һөҙөмтәһе", тип билдәрҙе. "Михаил Прохоров тарафынан съезда тәҡдим ителгән программала төп иғтибар нәк ошо "экзотик" тәҡдимгә йүнәлтелә, - тине Константин Толкачев. - Был тәҡдим алдан уйланылғанмы йәки сарағға иғтибарҙы йәлеп итеү өсөн сәхнәлә ҡапыл тыуған эмоциональ һүҙбәйләнеш кенәме, шуныһын аңламайым. Бында сәбәп сәйәси платформа йөкмәткеһенең ярлылығына һәм конструктив фекер етешмәүгә ҡайтып ҡала, күрәһең". Дәүләт Йыйылышы рәйесе билдәләүенсә, Рәсәй дәүләте тәүҙән үк күп милләтле булараҡ формалашҡан. Әлеге федератив система быуаттар буйы формалашҡан, һәм тиҙ генә уйлай һалып, бер ниндәй тәжрибә һәм сәйәси багаж булмаҫтан, бары тик иҡтисади иҫәплəүгә генә ҡоролған үҙгәртеүҙәр бик ҡатмарлы эҙемтәләргә килтерергә мөмкин. "Прохоров үҙен яҡшы эшҡыуар һәм идарасы итеп күрһәтте. Ләкин сәйәсмән булараҡ ул әле йәш һәм күп хаталар эшләй", - тип билдерҙе Константин Толкачев.

**Әббәс ҒӘЛЛӘМОВ, БР Президенты хакимиәте етәксеһе урынбаҫары:** "Киң аҙымдар менән атларға тырышыусының салбар төбө йыртылыуы ла ихтимал. Милләттәрҙе һәм федерализмды Прохоров уйлап сығармаған һәм уларҙы Прохоров бөтөрә алмай..."

## "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы" йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге башҡарма комитетының

## БЕЛДЕРЕҮЕ

27 октябрҙә эшҡыуар Михаил Прохоров үҙе ойошторған "Гражданлыҡ платформаһы" фирҡәһенең съезында провокацион белдереү яһаны. Рәсәй милли ардеры Рәсәй составында милли республикаларҙың һөҙөмтәле йәшәүен шик аҫтына ҡуйҙы. Күптән түгел генә Рәсәй Федерацияһы президенты посына дәғүә итеүсе кешенең бөгөн, Рәсәй федерализмының нигеҙен тәшкил иткән принциптарҙы һәм халыҡтарҙың халыҡ-ара хоҡуҡи акттарҙа нығытылған үҙбилдәләнешкә хоҡуғын инҡар итеп, ил Конституцияһына ревизия үткәрергә саҡырыуы беҙҙә ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра.

Беҙ, 1917-1920 йылдарҙағы Граждандар һуғышы һәм революция ялҡынында үҙ дәүләтселеген төҙөгән, XVI быуатта рус дәүләте составына үҙ ирке менән ингән замандарҙан алып Рәсәйҙең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо хаҡына һуғыштарҙа иҫәпһеҙ ҡорбандар биргән башҡорт халҡы вәкилдәре, Рәсәй Федерацияһының конституцион ҡоролошон үҙгәртеү тураһындағы бер нигеҙһеҙ саҡырыуҙарға юл ҡуйырға ярамағанлығын белдерәбеҙ. Михаил Прохоровтың Рәсәй Федерацияһы составындағы милли округтарҙы һәм республикаларҙы бөтөрөүгә йүнәлтелгән сәйәси инициативаһы - абсурд, конституцион хоҡуҡ күҙлегенән - ул дәүләткә ҡаршы. Уның шовинизм идеялары менән ағыуланған, бөйөк держава булған тоталитар империяның тергеҙелеүен көсәгәндәргә иҫәп тотоп әйтелгән һүҙҙәре илдәге ижтимағи-сәйәси хәл-торошто һәм милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе тотороҡһоҙландырыуға, дәүләт берҙәмлеген ҡаҡшатыуға килтереүе мөмкин. Тап шуның өсөн бындай саҡырыуҙарҙы енәйәт тип танырға кәрәк.

Дөйөм Рәсәй масштабындағы сәйәсмән роленә дәғүә итеүсе гражданин милли республикаларҙы "милли гетто" тип атай һәм РФ составындағы дәүләт берләшмәләрен шундай йән көйҙөргөс ҡуҙалау үҙенән-үҙе фашистар уйлап сығарған "йәһүд геттоһы"н иҫкә төшөрә. Прохоров әфәнде шулай уҡ тап республикаларҙа

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2013 йыл Рәсәйҙә Әйләнә-тирә мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителәсәк. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы республикала Әйләнә-тирә мөхитте һаҡлау йылын үткәреү буйынса саралар планын формалаштырыу өсөн тәҡдимдәр йыя башланы. Белешмәләр өсөн телефон: 8(347) 273-98-67.

✓Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле базаһында халыҡ хореографияһын һаҡлау буйынса фәнни-ғәмәли лабораторияһының тәүге ултырышы булды. "Башҡорт бейеүе көндән-көн үҙенең уникаллеген юғалта бара, - тине ансамблдең художество етәксеһе Айҙар Зәбәйҙуллин. - Хәлде үҙгәртмәгәндә, башҡорт бейеүе феномены юғалыуы ихтимал". Фәнни-ғәмәли лаборатория барышында крайҙы өйрәнеүселәр, тарихсылар, фольклорсылар һәм хореографтарҙың эшен берләштереү планлаштырыла.

✓Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында өс һәм унан күберәк бала булмаған балалар тәрбиәләгән, инвалид бала аҫыраған ғаиләләргә ер участкалары бүлеү тураһындағы тәртипкә төҙәтмә индерелде. Хәҙер балаларҙың береһе бәлиғ булһа ла ғаиләнең ер алыуға сираты һаҡланасаҡ. Билдәле булыуынса, әле программала ҡатнашыусы 3 мең тирәһе ғаилә иҫәптә тора. Мең ярым-ике мең кешегә ҡала биләмәһе сиктәрендә ер бүленәсәк, ҡалғандарға Өфө янындағы муниципаль райондар биләмәһенән участкалар биреләсәк.

✓Бөгөн, 3 ноябрҙә, Өфө дәүләт нефть техник университетының Йәштәр һарайында (С.Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт йорто) "Мин - әсәй!" ҡала конкурсы үтә. Өфө хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, бәйгелә 30 йәшкә тиклемге туғыҙ әсә ҡатнашасаҡ. Сара 18 сәғәттә башлана.

✓Башҡортостан баш ҡалаһының Ленин районында "М7 Молл" комплексы төҙөлә. Унда аҙыҡ-түлек, көнкүреш техникаһы һәм төҙөләш материалдары гипермаркеттары урынлашасаҡ. "М7" комплексын 2014 йылға асыу планлаштырыла. Бынан тыш, "ИКЕА" сауҙа үҙәге артында "Столплит" исемле мебель гипермаркеты төҙөлә. Әлеге ваҡытта Өфөлә йәмғеһе 29 сауҙа, күңел асыу, сервис объекты төҙөлә, уларға инвестицияларҙың дөйөм күләме 26,6 миллиард һум тәшкил итә.

✓ *М. Прохоровтың дәүләткә ҡаршы белдереүенә яуап итеп, беҙ Рәсәй Федерацияһының барлыҡ алдынғы ҡарашлы йәмәғәт көстәрен ул ойошторған "Граждандыҡ платформаһы" фирҡәһенә бойкот иғлан итергә саҡырабыҙ.*

Киске Өфө

БАШ ЙОРТ ӨФӨ

№44, 2012 йыл



"урындағы коррупцияланған власть беҙҙең кешеләрҙе иҙә һәм талай" тип сафсата һатып, үҙен ярлы һәм йәберләнгәндәрҙе яҡлаусы итеп күрһәтергә тырыша. Ә Михаил Прохоров үҙе һәм уның кеүектәр, үҙҙәренә миллиардтар туплап, Рәсәй халҡын таламанымы ни? Әммә ул был турала өндәшмәүҙе хуп күрә. Ә коррупция милләткә ҡарамай, һәм был иҫбатлау ҙа талап итмәй.

Олигархтың милли республикаларҙың иҡтисади күҙлектән маҡсатҡа ярашһыҙлығы тураһындағы фекере ысынбарлыҡҡа бөтөнләй тап килмәй. Власть амбицияларынан хәтеренә зыян килгән олигарх Башҡортостан, Татарстан, Яҡутстан кеүек республикаларҙың һәр саҡ федераль ҡаҙнаның ҡеүәтле донорҙары булғанлығын һәм булыуын иҫәпкә лә алырға теләмәй.

М. Прохоров үҙен рус халҡының яҡлаусыһы итеп күрһәтергә теләй. Әммә был улай түгел: ысынбарлыҡта уға һәм башҡа олигархтарға рус халҡының да, башҡа халыҡтарҙың да ихтыяжы ят. Уның милли мәсьәләне иҡтисади маҡсатҡа ярашһыҙлыҡ тезисы менән алмаштырырға тырышыуы артында олигархтар төркөмөнөң милләт-ара тотороҡһоҙлоҡ тулҡыны кәтәләсәге тураһындағы ҡотҡо ярҙамында властка килеү маҡсаты ята. Ул ваҡытта, йәнәһе, М. Прохоровҡа һәм уның партияһына Рәсәйҙе ҡотҡарыусы роле бирeләсәк. Былдай киләсәк рус халҡын һәм Рәсәйҙең башҡа халыҡтарын ҡәнәғәтләндерә аламы? Бер ваҡытта ла.

Беҙ М. Прохоровтың белдереүе милли республикаларҙы бөтөрөп, Рәсәйҙең федератив ҡоролошон тамырынан үҙгәртеп ҡороуға йүнәлтелгән провокациялар сылбырының бер звеноһы, тип иҫәпләйбеҙ. Уның белдереүе Рәсәй составында милли округтар һәм республикалар урынына яңы эре территориаль-сәнәғәт берләшмәләре ойоштороуҙы туранантура күҙаллаған "Рәсәй Федерацияһының дәүләт милли сәйәсәте стратегияһы" тип аталған документ проектының йәмәғәт фекер алышыуына сығарылыуы артында уҡ яңғырауы бөгөнгө Рәсәйҙә анығ федерализмды бөтөрөргә ниәтләгән айырым сәйәси көстәрҙең әүҙемләшеүен тағы бер тапҡыр раҫлай. Шуға ла бөтөн Рәсәй йәмәғәтселеге Рәсәйҙең юғары власть структураларының беҙҙең күп милләтле һәм төрлө конфессиялы илдә мәғлүмәт ҡотҡоһо таратыусыларҙың шундай белдереүҙәренә күҙ йомоуҙарына ҡарата ризаһыҙлыҡ белдерергә хоҡуҡлы. Былдай саҡырыуҙар РФ Федераль Йыйылышы Дәүләт Думаһының трибунаһынан да йыш яңғырай, әммә беҙҙең юғары вазифалы сәйәси эшмәкәрҙәр һаман да һуҡыр һәм һаңғырау булып ҡалыуҙы хуп күрә. Барлыҡ был сәйәсәт тирәһендәге ығы-зығы федератив дәүләттең ысынлап емерелеүе менән янаусы емергес тенденциялар барлыҡҡа килеүгә килтереүе мөмкин.

"Күҙе бар - күрә, ҡолағы бар -ишетә" тигән ҡанатлы һүҙҙәр бынан бик күп мең йылдар элек әйтелгән. Интернет-киңлеккә инегеҙ - ул ксенофобиянан, милли республикаларҙы бөтөрөү саҡырыуҙарынан ҡайнап тора. Бына шуларҙың иң ябайҙары, иң "зыянһыҙҙары": "Бөтөн был иҫкелек ҡалдығы булған милләтселекте тамырынан уҡ быуырға һәм барлыҡ ошо күп милләтле телдәрҙе, диндәрҙе һәм башҡа тәүтормош-община атрибуттарын нисек тә ҡыҫырыҡлап сығарырға кәрәк", "Рустар күпселекте тәшкил иткән Татарстан, Башҡортостан, Яҡутстан кеүек стратегик мөһим республикаларҙы бөтөрөү ҡулай булыр ине. Төньяҡ Кавказ республикалары айырылып сыҡҡанда ла, былар айырылырға ынтылмаҫ ине".

Былар барыһы ла үҙҙәренең алыҫҡа илтеүсе пландарын тормошҡа ашырырға әҙер шовинистик көстәрҙең реакцияһы. М. Прохоровтың дәүләткә ҡаршы белдереүенә яуап итеп, беҙ Рәсәй Федерацияһының барлыҡ алдынғы ҡарашлы йәмәғәт көстәрен ул ойошторған "Граждандыҡ платформаһы" фирҡәһенә бойкот иғлан итергә саҡырабыҙ.

Килеп тыуған шарттарҙа беҙ илдең юғары етәкселеген Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтендә ҡаралған барлыҡ дәүләт ҡоролошо, административ-территориаль бүленеште оптимизациялаштырыу һ.б. һылтауы менән ксено- һәм миллифобияны пропагандалауҙы киҫәтеү буйынса, хатта Рәсәйҙең федератив ҡоролошоноң конституцион принциптарын ҡайтанан ҡарауға асыҡтан-асыҡ саҡырыусыларҙы енәйәти яуаплылыҡҡа тарттырыуға тиклем, саралар күрергә саҡырабыҙ.

**2012 йылдың 31 октябрендә ҡабул ителде.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ БИК ОҠШАЙ

**Гәзитте алдырыуыма быйыл ни бары икенсе йыл ғына. Элегерәк ни өсөндөр был гәзиттең барлығы, уның республикабыҙ ауылдары буйлап таралыуы тураһында ишетмәгән булғанмын икән. Ниңә алдараҡ килеп эләкмәне икән ҡулға, тип уйлап, үкенеп тә ҡуям хәҙер.**

Тәүге тапҡыр Башҡортостан радиоһының "Юлдаш" каналынан ишетеп ҡалғайным, күп тә үтмәй, гәзиттең бер һаны ҡулға килеп эләкте. Уҡып ҡараным да, шунда уҡ оҡшап ҡалды. Эстәлекле, шул уҡ ваҡытта матур биҙәлешле булыуы менән арбаны ул мине. Әйткәндәй, эстәлеге лә күңелгә ятышлы, биҙәлеше лә күҙҙең яуын алырлыҡ гәзит ул "Киске Өфө". Бөгөн бит магазиндан ниндәй тауар йә запчасть алайым тиһәң дә, йә тышлығы матур булып та, сифаты түбән, йә, киреһенсә, сифатлы, әммә күңелгә ятмаған нәмә эләктереп ҡайтаһың... Гәзитебеҙ биттәрендә йыш ҡына баҫылған дини, тарихи, философик, тәрбиәүи темаларҙы, халҡыбыҙҙың матди хәлен яҡшыртыу, йолаларын һаҡлап ҡалыу, аң кимәлен үҫтереү һымаҡ көнүҙәк проблемаларҙы сағылдырған һөйләшеүҙәрҙе, сығыштарҙы ҡыҙыҡһынып уҡып сығам. Иң тәүҙә Ә.Ғ.-Үтәбай, З. Әйле, Гөлбаныу Гәрәева исемдәре аҫтында баҫылған мәҡәләләрҙе һайлап уҡыйым. Ғөмүмән, "Киске Өфө" редакцияһы коллективы алып барған йүнәлеш шулай дауам ителһә ине. Гәзитте юбилейы менән ҡотлап, артабан да халҡыбыҙға төрлө яҡлап бай мәғлүмәт еткереүсе тынмаҫ сығанаҡ булып ҡалыуын теләйем.

**Марсель ХӨРМӘТУЛЛИН.**
**Салауат районы.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# РӘСӘЙҘӘ ЙӘШӘҮ КЕМГӘ ЯҠШЫ?

## Өфөләләргә!

**Рус шиғриәте классигының поэмаһы атамаһына сығарылған ошо риторик һорау оҙаҡ йылдар яуапһыҙ ҡала килде. Некрасовты ваҡыт арбаһына ултыртып, беҙҙең көндәргә күсергәндә, моғайын, ул үҙ ижадын саҡ ҡына башҡасараҡ яҙыр ине. Быға, әлбиттә, ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы матбуғат конференцияһы сәбәп булыр ине, моғайын.**

Ҡала округы хакимиәте башлығының иҡтисади мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Альбина Йосопованың журналистарҙы ҡала округының 9 ай эсендәге социаль-иҡтисади үҫеше һөҙөмтәләре менән таныштырыуы барлыҡ тармаҡтарҙа ла алға аҙым яһалыуына һәм баш ҡалала кемгә йәшәү яҡшыраҡ икәнлегенә бер шик тә ҡалдырманы. Быны Санкт-Петербург ҡалаһының "Урбаника" территориаль планлаштырыу институтының "Рәсәйҙең иң ҙур 100 ҡалаһының интеграл рейтингы" тикшеренеүҙәре йомғаҡтары ла раҫлай. Уға ярашлы, Өфө, Краснодарҙан ҡала, икенсе урында килә (былтыр был күрһәткес алтынсы баҫҡыс булған), ә инде халыҡ һаны миллиондан ашҡан ҡалалар араһында ул иң беренсе баҫҡыста (былтыр Санкт-Петербургтан ҡала икенсе урында килгән. Ләкин бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: Мәскәү һәм Санкт-Петербург менән ярышырға кәрәкмәй, улар - федераль әһәмиәттәге ҡала). Сағыштырыу өсөн башҡа миллионлы ҡалаларҙың ниндәй урында барыуына күҙ һалыу ҙа етә: Новосибирск - алтынсы, Екатеринбург - 9-сы, Силәбе - 11-се, Һамар - 14-се, Ҡаҙан - 20-се, Омск - 24-се һ.б.

Был рейтингтың үҙенсәлеге шунда, унда бары тик статистика мәғлүмәттәре генә файҙаланыла. Иҫәпкә 100 ҡаланы алалар (Топ-100). Шуларҙың 98-е - Федерация субъекттарының баш ҡалаһы, ҡалған 32-һе - субъект эсендәге икенсе һан аҫтында торған ҡалалар (Башҡортостанда былдай ҡала, мәҫәлән, Стәрлетамаҡ). Ҡалала йәшәүсе халыҡ һаны 175 мең кешенән кәм булмаҫҡа тейеш. Баһа 50 мәрәй буйынса ике төркөмгә бүленеп ҡарала. Беренсе төркөм ҡала мөхитенең сифатын билдәләй. Йәғни был төркөмдә кеше иҫәбенән торлаҡ менән тәьмин итеү, ҡала юлдарында транспорттың күплеге, енәйәтселек кимәле, ҡала урамдарының яҡтыртылыуы, транспорт менән тәьмин итеү, тәҙәкләндереү, экологик быcраныу кимәле һ.б. пункттар иҫәпкә алына. Икенсе төркөмдә иһә йәшәү кимәле, халыҡтың матди хәле кимәле баһалана. Бында милеккә торлаҡ һатып алыу, бер бүлмәле фатирҙы ҡуртымға алыу, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ сығымдары, халыҡтың һатып алыу мөмкинлеге баһалана. Ошо ике күрһәткес - уңайлылыҡ һәм мөмкинлектәр бергә ҡушылып, ҡалаларҙың интеграл рейтингы асыҡлана ла инде.

**Әйткәндәй, статистика - диңгеҙҙәге айсбергҡа оҡшаш. Беҙгә уның ни бары өҫкө өлөшө генә күренә, ә "һыу аҫтында" күпме проценттар һәм һандар йәшерелгәнен бөрөү ҙә белмәй. Шуның кеүек, был рейтингта ла бары тик айсбергтың өҫкө өлөшө - баш ҡалала рәсми теркәлгән һәм рәсми иҫәптә торған, рәсми статистикаға инеүселәр генә алынғандыр, моғайын. Ә баш ҡаланы яуларға килеүселәрҙе Өфө ҡолас йәйеп ҡаршы алмай… Шуға ла, бәлки, Некрасовтың риторик һорауы 50 процентҡа ғына яуап табып, ҡалған өлөшө һаман да яуапһыҙ ҡалалыр?**

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

# КИҘЕҮҘӘН...

## тиҙ тәьҫир итә торған рецепттар



❖ Доктор Ефимов рецепты: ҡарағай ботаҡтарының осон 20-30 сантиметрлыҡ итеп һындырып алып, 40-50 грамм ылыҫты эмалле һауытҡа һалып, 2 литр һыу ҡойорға. 1 ҡалаҡ ваҡланған һуған ҡабығы, 1 балғалаҡ ваҡланған татлы тамыр (солодковый корень) йәки уның онтағын өҫтәгәс, һүрән утта 20 минут ҡайнатырға. Һуңынан 2 ҡалаҡ ваҡланған гөлйемеш өҫтәп, тағы ярты минут ҡайнатырға. 10-12 сәғәт термоста тоторға. Һөҙөргә. Яңынан ҡайнау хәленә еткерергә, һыуытырға һәм һыуытҡыста һаҡларға. Эскән саҡта төнәтмә бүлмә температураһында йәки унан да юғарыраҡ булһын. Тәүлегенә 1 литрҙан 2 литрға тиклем эсергә мөмкин. Был төнәтмә организмдан шлактарҙы сығара, уны витаминдар менән байыта, һөҙөмтәлә, күп сирҙәрҙе иҫкәртеү мөмкинлеге бирә.

❖ Һарымһаҡ ашағыҙ. Һарымһаҡ иммунитетты нығытыусы, вирустарға ҡаршы көрәшеүсе яҡшы сара, тик уны бешермәйенсә, сей көйө ашарға кәрәк. Һарымһаҡтың ауыҙҙы өтөп барған сифатын бөтөрөү өсөн һарымһаҡлы маринад әҙерләргә була. Сынаяҡтың 4/1 өлөшөндәй алма һеркәһе менән ошондай уҡ күләмдәге балды быяла банкала болғатырға, һыйғансы таҙартылған һарымһаҡ тештәре тултырырға. Шыйыҡса һарымһаҡты тулыһынса ҡаплап торорға тейеш. Ике аҙнаға һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә 2-3 һарымһаҡ теше ашағыҙ. Был юл менән маринадланған һарымһаҡ бер ай тирәһе һаҡлана.

❖ Йөн туҡымаға һеркә, прован майы (ашай торған зәйтүн майы, зәйтүн майының иң юғары сорттары шулай атала) һәм камфара һеңдереп, төнгөлөккә күкрәккә һалып ятырға. Арттан муйынға ҡырғыстан ҡырылған керән һалырға. Мал аҙығы, бесән вағы онтағын йылытып, оҙон йөн ойоҡтарға тултырып, ауырыуға кейҙерергә. Был дауа күп тапҡырҙар һыналған.

❖ Ярты лимонды тышы менән бергә ваҡ итеп турарға, 7 ваҡланған һарымһаҡ теше өҫтәргә, ярты литр ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға һәм 4 көнгә йылы урынға ҡуйырға. Һуңынан һыуытҡыста һаҡларға. Иртән ас ҡарынға 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ бал, 1 ҡалаҡ гөлйемеш, 1 ҡалаҡ ҡарағат, 1 ҡалаҡ ҡурай еләгенә 100 мг ҡайнар һыу ҡойорға. 15 минут тоторға. Ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр ярты-шар стаканлап эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА

# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ



## Һигеҙенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

"Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"н уҡытҡанда, әлбиттә, беҙ дингә ҡарата оло хөрмәт күрһәтергә тейешбеҙ. Дини тәғлимәт - бик ҡиммәтле тәғлимәт. Әммә шуны иҫәпкә алырға кәрәк. Ислам дине ерлекһеҙ бар булмаған. Мөхәммәттең тормошон өйрәнгән саҡта, уның һәр ваҡыт христиан динле кешеләргә яҡын булыуын күрәбеҙ. Мәҫәлән, Мөхәммәткә ун ике йәш тулғанда, ағаһы Әбү Талиб уны сәйәхәткә ала. Сәйәхәтселәр каруаны бер монастырь янында туҡтай. Ундағы Баһира исемле монах Мөхәммәттә буласаҡ бәйғәмбәрҙе күрә. Шулай уҡ Мәккәнең яңы дингә ышаныусы мосолмандарының күбеһе Африканың Эфиопия тигән иленә китә. Унда идаралыҡ иткән кеше үҙе христиан булһа ла, мосолмандарҙы йылы ҡабул итә. Тимәк, ул ислам йүнәлеше менән таныш була. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең Әл-Бураҡҡа атланып, Ябраил менән бергәләп Йәрүсәлим ғибәҙәтханаһына барыуын, унда өс бәйғәмбәр: Ибраһим-Аврам, Муса-Моисей, Ғайса-Иисус менән бергә доға ҡылыуын иҫкә төшөрәйек. Бынан сығып нимә әйтке килә: бөтөн диндәрҙең дә (Буддизмдан башҡа) нигеҙе бер. Шуның өсөн **уҡыусы диндәр араһында ниндәйҙәр өҫтөнлөк йәки кәмселек күреп өйрәнмәһен. Дин - ул Аллаға яҡынайыу юлы.** Ә юлдар төрлө. Әммә диндәр кешене фәҡәт яҡшылыҡҡа ғына өндәй. Яҡшылыҡҡа өндәү маҡсаты бер булһа ла саралары бер төрлө генә түгел. Дини тәғлимәттәр вәғәҙәр, хәҙистәр, һәр төрлө риүәйәттәр аша бирелә. Был осраҡта инде улар төрлө дини йүнәлештә төрлөсә. Ҡыҫҡаһы, уҡыусыға дин юлын һайлауҙы тәғәйен билдәләргә ярамай. Дүртенсе класс уҡыусыһы үҙаллы фекерләүгә, дини йүнәлеш һайлауға әҙер түгел. Үҫә килә үҙе аңлар, үҙе һайлар. Был дәрестәрҙә беҙ дини тәғлимәттәр һәм был тәғлимәттәрҙең тәрбиәләге әһәмиәтен аңлатырға тейешбеҙ.

## Һигеҙенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Һәр тәғлимәтте өйрәтеүсе айырым кешеләр була. Беҙҙең заманда улар - махсус уҡыу йорто тамамлаған, тейешле әҙерлек алған уҡытыусылар. Дин тарала башлаған ваҡытта ла махсус әҙерлекле кешеләр булғанлығын аңлатҡас, дәфтәргә яҙҙырып ҡуйыу яҡшы булыр. Сағыштырыу өсөн. Башҡорттарҙа борон-борондан сәсәндәр булған. Улар ҡобайырҙар әйтеп, ҡобайырҙағы фекерҙәргә аңлатма биреп, халыҡҡа аң-белем таратып йөрөгән. Берәй йәйләүгә йәки ауылға сәсән килерен белеп ҡалһалар, әллә ҡайҙарҙан йыйылыр булғандар. Ошо рәүешле байтаҡ ауыҙ-тел ижады һаҡланып ҡалған. Баланың зирәклеген белеп ҡалһалар, һәләтен бәләкәй саҡтан уҡ тәрбиәләгәндәр. Шуның һымаҡ, дини тәғлимәт таратыуға ла зирәк, аңлы, отҡор, һәләтле кешеләрҙе һайлап алғандар. Уҡыусыларға аңлап етмәгән ғәрәп телендә аят ятлатыуҙан һаҡ булығыҙ. Бер генә хәрефтең төшөп ҡалыуы ла йәки өндән яңылыш әйтелеүе лә ҡапма-ҡаршы мәғәнә биреүе ихтимал. Әйтеп үтеүебеҙсә, дәрестәрҙә теге йәки был аяттың һәм хәҙистең мәғәнәһен аңлатыуҙы маҡсат итеп ҡуйырға кәрәк.

## Һигеҙенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

**Яҡшылыҡ менән яманлыҡтың** алтын уртаһы - барыбер яҡшылыҡ ул. Башҡорт уны сама белеү тигән. Ҡыуанғанда ла сама бел, ҡайғырғанда ла сама бел. Сама белгән сайҡалмаҫ. Самаһыҙлыҡтың да самаһы бар. Сама саманан артмаһын. Баҫалҡы булһаң, баҫырҙар, үҫал булһаң, аҫырҙар, сама белһәң, ил ағаһы яһарҙар. Ниндәй генә теманы үтһәк тә, башҡорт халҡының этика нигеҙҙәре тураһында өҫтәп һөйләү яҡшы булыр. Былтыр нәшер ителгән әсбаптан /М. С. Бураҡаева. Тормош һабаҡтары. *Юғары класс уҡыусылары өсөн эстетик тәрбиә биреү буйынса ҡулланма.* "Китап" нәшриәте/ уҡытыусылар үҙҙәре өсөн тейешле өҫтәмә мәғлүмәттәр алыр, тигән фекерҙәмен.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ШАҢДАУ

# "АТТАР, ЭТТӘР, ҺЫЙЫРҘАР... тояҡлы юлбаҫарҙарға әйләнде"



**Гәзиттең һуңғы һанында Таңһылыу Баһауетдинованың ошолай тип исемләнгән мәҡәләһен уҡығас, ҡәләмгә тотонорға булып киттем.**

Автор бик актуаль проблема күтәрә. Ауыл халҡы өсөн баҙар иктисадына күсеү реформалары бихисап проблемалар тыуҙырҙы: колхоз-совхоздарҙың тарҡалыуы, эшһеҙлек, эскелек һ.б. ауылды меҫкенлеккә төшөрҙө. Ауыл халҡына мал тотоу урынына аҙыҡ-түлекте магазиндан һатып алыу ҡулайға әйләнде. Ауылда аусыл хужалығы менән шөғөлләнергә мөмкинлектәр ҡалманы. Хатта күп ауылдарҙа мал көтөүҙе ойоштороп булмай. Ҡарауһыҙ йөрөгән аттар, һыйырҙар сабынлыҡтарҙы тапап бөтөрөп, кешегә бесән эшләргә урын ҡалдырмай башланы. Атты күпләп үрсетеү ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Күптәр мал тотмаһа ла, ҡарауыл өсөн эт тота. Эт үҙенә тамаҡ таба, тигән булып, хужалары уларҙы урамға сығарып ебәрә. Эткә ит кәрәк булғас, кеше малына йәбешергә мәжбүр булалар. Үткән ҡыш улар күршенең ихатаһына инеп, алты һарыҡын, улымдың ҡош-ҡортон тамаҡлап сығып китте. Һуғыштан ҡайтмаған атайыма арнап Ҡорьән ашы үткәрермен, тип тәғәйенләп ҡуйған тәкәмде лә шул эттәр ашап китте. Ысынлап та, ислам динендә эттәрҙән һаҡланыу тураһында юҡҡа ғына әйтелмәгәндер: бөтә донъяла дингә ҡаршы асылған һуғыштың алғы рәтендә баралар был маҡмайҙар. Был хаҡта "Киске Өфө"ләге бер мәҡәләһендә Әхмәр Үтәбай яҙып үткәйне...

Австралияла заманында эттәр ҡырағайланып, бүренән дә яманыраҡҡа әйләнде һәм унда эттәргә ҡаршы дәүләт кимәлендә көрәш асырға мәжбүр булдылар. Әле генә телевизорҙан Баймаҡ районында булған хәлде бәйән иттеләр, унда ла эттәр йорт буйлап малдарҙы ҡырып сыҡҡан. Улар, әлбиттә, ташландыҡ эттәр эше бит инде ул.

Ауыл хакимиәттәре эттәрҙе аттыра ла, бер ни ҙә эшләй алмай: закон юҡ, прокурор уларға штраф һалырға әҙер тора. Шул уҡ хәл көмөшкә ҡыуыусылар менән дә ҡабатлана бит. Ауыл хакимиәте көмөшкә ҡыуыусылар менән көрәшеп ҡарай, әммә уларға таяныс булыр закон юҡ, прокуратура шулай уҡ көмөшкәселәрҙе яҡлап сыға. Нисек була инде был? Эттәрҙе атыу - вәхшилек, ә улар кеше малын тәләфләһә - ләмм-мим. Ишетеүемсә, БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары ла бына инде икенсе йыл көтөү тураһындағы законды ҡабул итә алмай. Ауылдың бөткәнен көтөп яталармы икән әллә улар?

**Мәүҙиға ҒӘБИТОВА,**
**Әбйәлил районы**
**Буранғол ауылы.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# МЕЙЕ БОҘҘАРЫН ИРЕТЕҮСЕ

**Башҡорт матбуғат баҫмаларын уҡып барырға тырышам. Улар аша республикала барған яңылыҡтарҙы башҡорт телендә уҡып, ваҡиғалар хаҡында башҡортса фекер йөрөтөргә өйрәнәһең.**

Мәҫәлән, күп темаларға мин башҡорт телендә фекер йөрөтә алмайым, сөнки күп тема буйынса алған мәғлүмәт рус телендә булды бит. Аң шулай ҡоролғандыр инде. Ниндәй телдә мәғлүмәт алаһың, ул өлкәлә шул телдә уйлай башлайһың. Юриспруденция темаһына, мәҫәлән, мин башҡорт телен яҡшы белеүемә ҡарамаҫтан, тыуған телемдә кинәнеп һөйләй алмайым. Әммә халҡыбыҙ тормошо, тарихы, сәйәси ваҡиғалар тураһында һөйләгәндә тыуған телдә фекер йөрөтөү бик мөһим. Сөнки халҡы өсөн янған кеше тыуған халҡы телендә уйларға ла тейеш. Милли асыл шул саҡта ғына асылалыр. Йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнашҡан кешеләрҙе яҡшы беләм. Шундай күҙәтеүемдә әйтер инем: тап башҡорт телендә яҡшы һөйләшкән, фекерләгән кешеләр генә халыҡтың ысын патриоттары булып ҡала. Минең булмышым башҡорт, телде белеүем мөһим түгел, аңлауым етә, тигән активистар ҙа бар. Улар, ысынында, халҡым, тип, карьера өсөн генә ҡыҫҡырып йөрөгән һымаҡ тойола миңә. Мин бының сәбәбен халҡыбыҙ тамырҙары менән бәйләнеш булмауҙа күрәм. Ә инде милли тамырҙарың менән бәйләнеш булһын өсөн тыуған телдә фекерләргә өйрәнергә кәрәк. Башҡорт телендәге гәзиттәребеҙ - бының өсөн бик ҡулай. Башҡа баҫмаларыбыҙҙы ла яманламайым, әммә "Киске Өфө" гәзите тап ошо йүнәлештә эшләй кеүек тойола миңә. Башҡорт асылын, холҡон, башҡорттоң тел байлығын ҡулланып, гәзит милли рухыбыҙҙы, ғорурлығыбыҙҙы уята. Тел байлығымды мин тап ошо гәзит аша байытам. Бынан тыш, "Киске Өфө"лә фекерләргә өйрәткән мәҡәләләр йыш сығып тора. Был фекерләү күп осраҡта беҙ өйрәнгәнсә генә лә түгел. Бөтөнләй көтөлмәгән һығымталар яһалып ҡуя ҡайһы саҡта. Минеңсә, башҡорттар араһында ғына түгел, бар рәсәйлеләргә хас етешһеҙлек - стандарт булмағанса фекерләй белмәйбеҙ. Шуға ла беҙ күп осраҡта һарыҡ көтөүен хәтерләтәбеҙ.

Тағы ла гәзиттә тәрбиәүи мәҡәләләр күп. Синыф сәғәттәрендә тап "Киске Өфө"лә сыҡҡан Ризаитдин нәсихәттәре, башҡа шундай мәҡәләләрҙе ҡулланып, дәрестәр үткәргән уҡытыусыларҙы беләм. Уҡытыусыларға гәзит ҙур ярҙам. Сөнки хәҙерге әҙәбиәт дәреслектәрендә балаларҙы тәрбиәләй алыр материалдар алып ташланған. Л.Н. Толстойҙың ошо темаға яҙылған бик күп матур әҫәрҙәре мәктәп программаһына инмәгән, башҡорт әҙәбиәте лә әле патриотизм уятҡан, шул уҡ ваҡытта милли асылыбыҙҙы марксизмға ялғаған, рухи ҡиммәттәребеҙҙе инҡар иткән совет әҙәбиәте идеологияһы йоғонтоһонда.

"Киске Өфө" - тап бына ошо бушлыҡты тултыра алырҙай гәзит. Тик уны уҡыр өсөн дә рухи база, фекерләй белеү, белем булырға тейеш. Һәр башҡорт та уны уҡый алмаясаҡ. Күптәр аңламаясаҡ. Аңламауҙарының сәбәбе - "һары матбуғат" уҡып, ҡарап, еңел уйлаусыға әйләнеүҙәрендә. Шуға ла "Киске Өфө" бөгөнгө көндә мейе боҙҙарын ярған боҙ ярыусы карапты хәтерләтә. Ләкин ниндәй генә көслө булмаһын, ул яңғыҙы ғына был эште барыбер атҡарып сығара алмаясаҡ. Ошо ярылған юлдан башҡа караптар үтмәһә, башҡа боҙ ярыусы караптарҙың ярҙамы булмаһа, был юл тиҙ арала туңа. Шуға күрә бөтөн башҡорт матбуғатына бер булып эшләргә, ярылған юлдан бергә барырға кәрәк.

**Динислам ӘБДРӘХИМОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

✓ *Өфө ҡалаһының тарихын яҙыуҙы автор башҡорт халҡы тарихынан башлай. Был яҙма "Өфө ҡалаһында иң тәүгеләрҙән булып йәшәүселәр башҡорттар була" тип башлана".*

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ, ИМӘНҠАЛА!

# ӨФӨ ҠАЛАҺЫНДА...

## иң тәүгеләрҙән булып йәшәүселәр башҡорттар була

**"Киске Өфө" гәзите сыға башлағандан алып уның иң төп темаларының береһе - Өфө тарихын, Өфөнөң йәшен, "Өфө" һүҙенең нимә аңлатҡанын асыҡлау булды. Хатта хәҙерҙән үк "Өфө ҡалаһына - 1500 йыл" тигән, шулай уҡ был ҡаланың башҡа тарихи мәлдәре тураһындағы хәҡиҡәтте раҫлар әллә күпме документтар, материалдар бар. Шуларҙың ҡайһы берҙәренән өҙөктәргә күҙ һалып китәйек.**



**Петр РЫЧКОВ, тарихсы, Санкт-Петербург Фәндәр академияһының беренсе мөхбир ағзаһы:** "Ышанаслы сығанаҡтарҙан күренеүенсә, башҡорттар яһаҡты алыҫ йөрөтмәҫ өсөн һәм яу килгәндә һаҡланыу урыны булдырыу маҡсатында үҙ ерҙәрендә ҡала һалдырыу ниәте менән 1753 йылда батша Иван Васильевичҡа мөрәжәғәт иткән. Ҡала бейек тауҙарға уралған Ағиҙелдең уң яҡ ярында, тәрән һигеҙ йырын араһында һалынған. Шул йырындарҙың береһенән Саталҡы йылғаһы ағып ята. Өфөнөң исемен быңдағы боронғо ҡаланан алғандар, тип әйтергә була. Ни өсөн тигәндә, нуғай хандары йәшәгән осорҙа уҡ бындағы ҡала Өфө тип аталыр булған. Икенсе яҡтан, Ағиҙел ярында төҙөлгән ҡалаға Өфө (Кариҙел) йылғаһының исемен алып ҡушҡандар, тиеү мәғәнәһеҙ. Өфө йылғаһы Ағиҙелгә ҡаланан саҡырым өҫтәрәк ҡоя. Йылға исеме менән атарға теләһәләр, Өфөнән ике тапҡырға кинерәк булған Ағиҙел исемен алырҙар ине. Бынан тыш, ҡаланан биш саҡырым тирәһе алыҫтараҡ Өфө йылғаһы буйында, бейек ярында боронғо ҡаласыҡ урыны хәҙер ҙә күренеп ята. Бында нуғай хандары йәшәгән, тип һөйләйҙәр. Ҡаласыҡ Өфө йылғаһы буйында урынлашҡанға күрә, Өфө тип аталған, күрәһең. Шунан күреп, Рәсәй төҙөгән ҡалаға ла Өфө атамаһы биргәндәр".

**Мөхәмәтсәлим ӨМӨТБАЕВ, ғалим, мәғрифәтсе:** "...Төрки тарих "Көнһ әл-әхбәр"ҙә ("Хәбәрҙәр асылы") башҡорттарҙың ҡасандыр етмешләп ҡалаһы һәм ҡәлғәһе булыуы, иҫкесә 530 йылдар (1152 йылдар) тирәһендә Ислам динен ҡабул итеүҙәре телгә алына. Өфөнө, имән урманында төҙөлөп, имән ҡаҙыҡтар менән уратылып алынғанлығы өсөн Имәнҡала тип атайҙар".

**Талмас ҒАРИПОВ, филология фәндәре докторы:** "Миненсә, Өфө атамаһы һунғар (венгр) һүҙҙәренең комбинацияһынан яһалған. Мәҫәлән, һунғар телендә О фойо - "боронғо йылға" тигәнде аңлата. Уй фойо - "яңы йылға" булыуы ла мөмкин, сөнки ҡайһы саҡ боронғо халыҡтар бер үк йылғаның тармаҡтарын төрлө исем менән атап йөрөтөр булған..."

**Нияз МӘЖИТОВ, археолог, профессор, академик:** "Көньяҡ Уралда тарихи әһәмиәте буйынса Өфөгә тиң булған башҡа Урта быуат археологик ҡомартҡыһы юҡ. Был йәһәттән уның боронғолоғон археологик һәм яҙма сығанаҡтарға нигеҙләнеп раҫланған Мәскәү, Новгород, Киев, Ташкент, Ҡаҙан ҡалалары менән генә сағыштырырға мөмкин".

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы:** "Археолог Нияз Мәжитов Өфө ҡалаһында Имәнҡаланан ҡалған бай культура ҡатламын тапты. Бында табылған ҡомартҡылар Өфөнөң Урта быуаттарҙан уҡ сәйәси һәм сауҙа үҙәге булғанлығын иҫбатлай. Шуға күрә Өфөнөң барлыҡҡа килеү тарихын XVI быуаттың 70-80-се йылдары менән генә бәйләү дөрөҫ түгел. Ғөмүмән, башҡорт тарихының Урта быуат дәүеренә күҙ һалһаң, унда асыҡланмаған "аҡ таптар" бик күп. Әлегә тиклем беҙҙең боронғо тарих боҙоп күрһәтелә".

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ, яҙыусы, академик:** "Урыҫ матбуғатында Өфөнөң тарихы һаман да бер яҡлы, элеккесә яҡтыртыла. Бының төп сәбәптәренең береһе - Өфө тарихын өйрәнеүселәр электән гел урыҫ милләтенән булды. Башҡорт краеведтары бөгөн дә аҙ. Шуға күрә, Өфө тигәндә, тик урыҫ мәҙәниәте тураһында ғына һүҙ алып баралар. Ләкин Өфөнөң башҡорт, мосолман мәҙәниәте лә бар бит. Заманында бында мосолман мәҙрәсәләре, мәсеттәре гөрләп торған. Улар хаҡында, һис шикһеҙ, яҙырға кәрәк. Бөгөн баш ҡалабыҙ тарихы яңы факттар, концепциялар менән тулыландырылып, яңы ҡараш нигеҙендә яҙылырға тейеш. Әммә ул ҡасан яҙылыр?"

**Инга ГВОЗДИКОВА, тарих фәндәре кандидаты:** "Мәскәүҙә Рәсәй дәүләт тарихи музейының яҙма сығанаҡтары булегендә бер ҡулъяҙма һаҡлана. Унда: "Краткое описание губернского города Уфы с начала его построения и до сего 1808 года, собранное из разных древних летописей и достоверных описаний и приведенное в порядок 1808 года. Уфа" тип яҙылған. Өфө хаҡындағы был ҡулъяҙманың авторы билдәһеҙ. Өфө ҡалаһының тарихын яҙыуҙы автор башҡорт халҡы тарихынан башлай. Был яҙма "Өфө ҡалаһында иң тәүгеләрҙән булып йәшәүселәр башҡорттар була" тип башлана".

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ДӨРӨҪ ЮЛ КҮРҺӘТЕҮСЕ МАЯҠ

**Тормошобоҙға сағыштырмаса яңыраҡ килеп ингән, ҡыйыу, сая журналистар туплаған "Киске Өфө" гәзите ваҡытлы матбуғатта үҙ урынын бик тиҙ тапты. Һәр һанында башҡорт халҡы тип янған авторҙарҙың мәҡәләләрен, тапҡыр һүҙҙәрен уҡып, рухи күтәренкелек алаһың. Гәзиттең баш мөхәррире, бар булмышы менән "илем, ерем, телем" тип янған Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева етәкләгән коллектив һәр иртәне, башҡортома ниндәй тос, фәһемле фекер әйтергә, тигән уйҙарҙан, эҙләнеүҙәрҙән башлайҙыр, тим.**

Шиғри күңелле башҡорт урман эргәһенән барһа - урман, тау буйлап барһа - тау хаҡында йырлаған, ағасты һылыу ҡыҙ менән, яландағы сәскәләрҙе уның күҙҙәре менән сағыштырған. Шул уҡ ваҡытта откор һүҙле, сәсән телле халҡыбыҙға саялыҡ та хас. Гәзиттең йәш коллективы ла нәҡ ошо сифаттарға эйә.

Фараз итеү, уйҙырмалар менән гәзит уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырыу мөмкин түгел. "Киске Өфө"лә мәҡәләләрҙең факттарға таянып яҙылыуы уны уҡымлы итә. Киләсәктә лә "Киске Өфө" гәзите Башҡотостан халҡын изгелеккә, рухи күтәренкелеккә өндәүсе, дөрөҫ юл күрһәтеүсе маяҡтай балҡып торһон.

**Гәүһәр БАТТАЛОВА,**
**"Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы директоры.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ...

## орден кавалерҙары

**Насир Абдуллин** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Есаул. 14-се Башҡорт полкында хеҙмәт итә. "6-7 октябрҙә Лейпциг эргәһендәге алыштағы ҡаһарманлығы" өсөн 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1814) менән бүләкләнә, "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

18-се Башҡорт полкы император указына ярашлы, 1812 йылдың 8 августында 4-се кантон башҡорттарынан төҙөлә.

**Буҙыҡаев Мөхәмәтйән Еразбай улы** - 1789 йылда Ырымбур губернаһының Троицк өйәҙе Барын-Табын олоҫоноң Кесе Муйнаҡ ауылында тыуа (хәҙерге Учалы районы) - 1856 йылда Санкт-Петербург ҡалаһында вафат була. Кантон начальнигы, ғәскәр старшинаһы (1846). 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнаша. 1808 йылдан хәрби хеҙмәттә. 1810 йылда урядник дәрәжәһен ала, 1815 йылда - зауряд-хорунжий итеп үрләтелә. 1831 йылда зауряд-есаул була. 1812 йылғы Ватан һуғышында 18-се Башҡорт полкында йөҙ башы булып хеҙмәт итә. 1832-1847 йылдарҙа 4-се Көнбайыш, бер үк ваҡытта 1835 - 1847 йылдарҙа 4-се - Загорный, 1847 йылдан - 5-се башҡорт кантоны начальнигы. Тире эшкәртеү заводы хужаһы. 1856 йылда башҡорт делегацияһы составында Александр Икенсенең коронацияһында ҡатнаша. "1812 йылғы Ватан һуғышы. иҫтәлеге" миҙалы менән наградланған. Уның тураһында "Буҙыҡай кантон" башҡорт халыҡ йыры ижад ителгән.

20-се атлы полк 1812 йылдың 8 августындағы указға ярашлы, Пермь губернаһы Пермь өйәҙе Ғәйнә олоҫоноң Ҡуян ауылында 1-се һәм 2-се кантон башҡорттарынан төҙөлә.

**Баһаутдин Адутов** - 1788 йылғы, Пермь наместниклығы Уса өйәҙе Ғәйнә олоҫоноң Елпачиха ауылынан (хәҙерге Пермь крайының Барҙым районы). Кантон начальнигы, зауряд-есаул. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнаша. Адутовтар тоҡомонан. 1806 йылдан хәрби хеҙмәттә. 1811 йылдан йортауай есаул, 1812 йылдан 20-се полктың поход старшинаһы, 1814-1816 йылдарҙа - Себер линияһында дистанция башлығы. 1820- 1831 йылдарҙа 1-се башҡорт кантоны начальнигы, 14-се класлы чиновник (1821). Ике йыл Иркутск губернаһында дистанция башлығы сифатында этап хеҙмәтендә була. 1831 йылда Санкт-Петербургта Башҡорт-мишәр ғәскәре депутацияһында император Николай Беренсенең аудиенцияһында ҡатнаша. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге" миҙалы менән наградланған.

Кинйәғолов һәм Мәмбәтов хеҙмәт иткән полктарҙың номерҙары күрһәтелмәгән. Әммә уларҙың йәшәгән урыны билдәле - Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең 9-сы кантоны. Улар ошо кантонда формалаштырылған полктарҙа хеҙмәт иткән тип фаразларға мөмкин.

**Ҡотлобай Кинйәғолов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Урядник. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең 9-сы башҡорт кантонынан. Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһе менән наградланған.

**Ялсығол Мәмбәтов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Тархан. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең 9-сы башҡорт кантонынан. Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһе менән наградланған.

Энтузиастарҙың Башҡортостан халыҡтарының 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы тураһындағы архив материалдарын эҙләүе дауам итә. Ҡалған 15 полк хәрбиҙәре араһында ла Рәсәйҙең бойондороҡһоҙлоғо хаҡына ҡаһарманлыҡ ҡылған батырҙарҙың табылыуына өмөт ҙур.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Аҙағы).**

✓ *Бына ошо юҫыҡтар алмашынған, халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тормош тәжрибәһен ҡулланып йәшәргә ынтылған осорҙа "Киске Өфө" - башҡорт кешеһен ысын мәғәнәһендә башҡорт итеп тойорға ярҙам итеүсе баҫма.*



**Гәзитебеҙ ойошторолоуының 10 йыллығы уңайынан иң яҡын дуҫтарыбыҙҙың дүртеһенә дүртәр һорау биреп, "Ситтән тороп диалог" ҡорҙоҡ. Диалогта ҡатнашыусылар: күренекле шағир, прозаик, ҡурайсы һәм йыраусы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Төрки илдәре шиғриәтенең II Халыҡ-ара фестивале лауреаты Мәүлит ЯМАЛЕТДИН, билдәле педагог, үҙенсәлекле фекер эйәһе, педагогика фәндәре кандидаты Вәкил ХАЖИН, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Башҡортостан алдындағы фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн", "Рәсәй профессионалдары" миҙалдары кавалеры Баймаҡ районы һәм ҡалаһы үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры Луиза ДӘҮЛӘТШИНА һәм билдәле шағирә, журналист, Бөрйән районының "Таң" гәзите баш мөхәррире урынбаҫары Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**

# АҠМУЛЛАБЫҘ ТЕРЕ БУЛЫП,

## атының башын тәүҙә, моғайын,

▸ **Хәҙерге заман күҙлегенән сығып ҡарағанда, "Киске Өфө" гәзите милләтебеҙҙең ижтимағи фекер үҫешендә ниндәй роль уйнай, тип уйлайһығыҙ?**

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН:** Бөгөнгө ҡатмарлы заманда элекке маяҡтар юғалды, юҫыҡтар буталды. Гәрсә, уларҙың күбеһе яһалма һәм ялған ине. Шулай ҙа милләтебеҙ идеологик төшөнсәләргә тоғро булырға тырышты, үҙенең тормошон уларға яраҡлаштырып алып барҙы. Бөгөн иһә, шағир һүҙҙәре менән әйткәндә, "йылдар ауыр, юлдар болғауыр". Шундай шарттарҙа халыҡ нимәгәлер ышанырға, көнкүрешендә ниндәйҙер идеяларға таянырға тейеш. Бына ошо юҫыҡтар алмашынған, халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тормош тәжрибәһен ҡулланып йәшәргә ынтылған осорҙа "Киске Өфө" гәзите биттәрендә баҫылған материалдарҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Рубрикалар төрлөлөгө, материалдарҙың сифаты һәм, иң мөһиме, милли рухы уны уғата уҡымлы итә лә инде. Гәзиттең тиражы арта барыуы - быны асыҡ дәлиле. Дөйөмләштереп әйткәндә, "Киске Өфө" - башҡорт кешеһен ысын мәғәнәһендә башҡорт итеп тойорға ярҙам итеүсе баҫма.

**Вәкил ХАЖИН:** Ҙур әйберҙәр алыҫтаныраҡ аныҡ күренә. "Киске Өфө" гәзитенең милли үҙаң үҫтереүҙәге ролен дә, бер ни тиклем ваҡыт үткәс, теүәлерәк баһалай алырбыҙ, моғайын. Бөгөн иһә шуны әйтә алам: милләттең ыңғай киләсәген тәьмин итеүсе саралар, факторҙар араһында "Киске Өфө" гәзитенең урыны "партерҙа". Милләттең милләт булып һаҡланыуында тел һәм мәҙәниәт хәл иткес роль уйнай. Мин мәҙәниәткә хатта өҫтөнлөк тә бирер инем. Ғөрөф-ғәҙәттәр, тарихи йәшәү рәүеше, ғаиләләге хәлдәр, ололарға, балаларға мөнәсәбәт, кейемдәр, милли аштарыбыҙҙың үҙенсәлеген ни тиклем оҙағыраҡ һаҡлай алһаҡ, милли үҙаңыбыҙ ҙа ғүмерлерәк булыр. "Киске Өфө"гәзите, тап шундай булһын ине, тип хеҙмәт итә лә инде.

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА:** "Киске Өфө" гәзитенең халыҡтың рухи үҫешенә булышлыҡ итеүе хаҡында уйланғанда мин бала саҡта ауылдарға төрлө сәйәси хәлдәрҙе аңлатырға килеүсе лекторҙарҙы күҙ алдына килтерәм. Мәҙәниәтле, мәғрифәтле кешеләр ул саҡта ауылға килеп, халыҡҡа тормош хәлдәре, сәйәси ваҡиғалар тураһында һөйләп, ауыл халҡының аңын балҡытып китә торғайнылар. Уларҙың аңлатыуы аша халыҡ үҙен борсоған һорауҙарға яуап ала ине һәм тормоштағы күп кенә ваҡиғаларға баһа бирергә өйрәнә ине. Тап шуның кеүек, "Киске Өфө" оло донъяла һәм үҙебеҙҙә барған ваҡиғаларға үҙенең күҙлегенән ҡарап, төрлө фекерҙәр туплай һәм уларҙы гәзит аша сығыш яһаған ғалимдар, журналистар, сәйәсмәндәрҙең ғәме аша яҡтырта. Аҡыллыға ишара ла етә, тигәндәй, гәзит уҡыусылар тормоштағы хәл-ваҡиғаларға үҙенең баһаһын бирергә өйрәнә. Мин ошо хәлде рухи ихтыяжды ҡәнәғәтләндереүгә тиңләйем.

*Әгәр ҙә бөгөн Аҡмуллабыҙ терелеп, арбаһына китаптарын тейәп, Өфө ҡалаһына килһә, кемдең ҡапҡаһы төбөнә туҡтар ине икән? Ни өсөн тигәндә, Аҡмулла үҙ ғүмерендә юлда йөрөгәндә туҡталыр урын итеп матур, бай, бейек йорттарҙы һайламаған, ә шул йортта йәшәгән кеше менән бер ултырып һөйләшеү, кәңәшләшеү, аҡыл алыу мөмкинлегенән сығып эш иткән. Шуға күрә ул хәҙер Өфөгә килһә, иң тәүҙә мотлаҡ "Киске Өфө" матбағаһы яғына атының башын бороп, унда эшләүселәр менән уртаҡ фекергә килеп, кәңәш ҡорор ине, тип уйлайым мин. Беҙҙең башҡорт халҡының күңелендә элек-электән ҡанына һеңеп ҡалған ерһөйәрлек, илһөйәрлек һәм азатлыҡ тойғоһо һаҡлана. Ул тойғоһо бик алыҫта, күңел төбөндә йәшәй. Ҡасандыр юғалып ҡалған азатлыҡты һағыныу тойғоһо һәм уны ҡайһы ваҡыт кире ҡайтарып булмауға бәйле аңлау ҙа йәшәй беҙҙә. Бына ошо тойғоно ҡайтарыуға ынтылыш беҙҙе милләт итә. Ошо тойғоларҙы хәҙерге күҙлектән үҫтерергә, өмөт бағларға өйрәтеүҙә лә "Киске Өфө" гәзите ҙур эш башҡара.*

Әгәр ҙә бөгөн Аҡмуллабыҙ терелеп, арбаһына китаптарын тейәп, Өфө ҡалаһына килһә, кемдең ҡапҡаһы төбөнә туҡтар ине икән? Ни өсөн тигәндә, Аҡмулла үҙ ғүмерендә юлда йөрөгәндә туҡталыр урын итеп матур, бай, бейек йорттарҙы һайламаған, ә шул йортта йәшәгән кеше менән бер ултырып һөйләшеү, кәңәшләшеү, аҡыл алыу мөмкинлегенән сығып эш иткән. Шуға күрә ул хәҙер Өфөгә килһә, иң тәүҙә мотлаҡ "Киске Өфө" матбағаһы яғына атының башын бороп, унда эшләүселәр менән уртаҡ фекергә килеп, кәңәш ҡорор ине, тип уйлайым мин.

Беҙҙең башҡорт халҡының күңелендә элек-электән ҡанына һеңеп ҡалған ерһөйәрлек, илһөйәрлек һәм азатлыҡ тойғоһо һаҡлана. Ул тойғоһо бик алыҫта, күңел төбөндә йәшәй. Ҡасандыр юғалып ҡалған азатлыҡты һағыныу тойғоһо һәм уны ҡайһы ваҡыт кире ҡайтарып булмауға бәйле аңлау ҙа йәшәй беҙҙә. Бына ошо тойғоно ҡайтарыуға ынтылыш беҙҙе милләт итә. Ошо тойғоларҙы хәҙерге күҙлектән үҫтерергә, өмөт бағларға өйрәтеүҙә лә "Киске Өфө"гәзите ҙур эш башҡара. Гәзит беҙҙең күңелгә рух бирә, милләт вәкилен үҙен ошо милләттең бер өлөшө итеп тойорға булышлыҡ итә.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА:** "Киске Өфө" - рух илсеһе. Ул бөгөнгө компьютер технологиялары ныҡ үҫешкән заманда үҙ асылыбыҙҙы онотмаҫҡа асырғанып саҡырып торған кеүек. Унда үҙенде ҡыҙыҡһындырған һәр өлкәгә ҡағылышлы һорауҙарға яуап, аҡыллы фекерҙәр табырға мөмкин. "Киске Өфө"ябай ғына гәзит түгел, ул уҡыусыны уйланырға, фәлсәфә ҡорорға мәжбүр итә. Шуға күрә мин "Киске Өфө"нө милләтебеҙҙең ижтимағи фекер үҫешендә бик мөһим роль уйнай, тип һанайым. Һәм ул тап шулай.

▸ **"Киске Өфө" ҡала гәзите генә түгел, ә баш ҡала гәзите лә. Һеҙ тәүге тапҡыр аяҡ баҫҡан Өфө менән хәҙерге Өфө араһында ниндәй айырма бар? Ул ниндәй кимәлдә үҙгәргән, был ҡалаға килеү һеҙҙең тормошҡа ниндәй йоғонто яһаны?**

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН:** Тәүге тапҡыр Өфө ҡалаһына аяҡ баҫҡанда, миңә 17 йәш ине. Уйлап ҡараһаң, уға хәҙер ярты быуатҡа яҡын ваҡыт үткән. Мин үҙгәргән кеүек үк, ул да танығыһыҙ булып үҙгәрә бара. Айырма шунда: ул йылдан-йыл матурлана һәм йәшәрә, ә мин, киреһенсә, күрмәлекһеҙерәк һәм ҡартыраҡ була барам. Республикамдың баш ҡалаһы булараҡ, Өфөнөң тормошома яһаған йоғонтоһо иҫ киткес ҙур булды. Беренсенән, ул мине уҡытып, һөнәрле итте, икенсенән, унда дүрт йыл белем алыу дәүерендә тыуған төйәгемде түҙгеһеҙ итеп һағындыртып, шағир яһаны. Тәүге шиғырҙар шәлкемем дә Өфөлә нәшер ителеүсе "Совет Башҡортостаны" гәзитендә донъя күрҙе. Минең башымды күккә тейҙерткән ул ваҡиғаға киләһе йылдың апрелендә теп-теүәл 45 йыл тула.

**Вәкил ХАЖИН:** Мин Өфөгә тәүге тапҡыр 1962 йылда аяҡ баҫтым. Күңелемдә Башҡортостандың баш ҡалаһында, ҡайҙа барһаң да, башҡортса һөйләшәләрҙер, башҡорттар күптер, тигән ышаныс бар ине ул саҡта. Тик ысынбарлыҡ мин көткәнгә һис тап килмәй булып сыҡты. Шул тәү килеүемдә өс көн булдым мин Өфөлә. Әммә ләкин бер генә башҡортто ла осратманым, башҡортса һөйләшкәнде лә ишетмәнем. Бер күренекле генә яҙыусыға, уны дәреслектәге фотоһы буйынса танып, бик оҙаҡ эйәреп барҙым. Ниндәйҙер бер танышын осраҡҡас, уның татарса һөйләшеп торғанын ишетеп, бик тә аптырап ҡуйғайным. Мәғәфүр Хисмәтуллиндың "Өфөлә башҡорт мин генә микән, тип уйлай торғайным" тигән һүҙҙәре шул 60-сы йылдар тураһында. Шул замандар менән сағыштырһаң, хәҙер хәлдәр, әлбиттә, күпкә яҡшыраҡ. Унының һәр кем үҙе лә белә.

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА:** Өфө ҡалаһына килгән һайын үҙебеҙҙә ниндәйҙер үҙгәрештәр кисереп ҡайтабыҙ. Был баш ҡалабыҙҙың йылдан-йыл төҙөкләнә, күркәмләнә, таҙара барыуына бәйлелер. Шул йәһәттән күңелде йыуатҡан күренештәр ҙә Өфөлә күберәк осрай. Элек беҙ Өфөлә башҡортса һөйләшкән кешеләрҙе әҙ осрата торғайныҡ. Бер мәл Башҡорт дәүләт филармонияһында "Тамыр" студияһының концерты булды. Шунда сәхнәләге кескәй йондоҙҙарҙың башҡортса балҡыуын, залдағы тамашасы булып килгән балаларҙың ата-әсәләре менән үҙ лөғәтендә аралашып, тамашаға үҙ асылында шатланғанын күрһәгеҙ! Хәҙер Өфө ҡалаһында шулай уҡ бик күп матур йәш башҡорт ғаиләләренең үҙҙәренең матур йолалары барлыҡҡа килде. Улар үҙ-ара тығыҙ аралаша, уларҙың барыр урындары, үткәрер саралары күбәйҙе. Ә элегерәк Өфөгә килеп урынлашҡан ағайҙарыбыҙҙың, апайҙарыбыҙҙың, ғалимдарыбыҙҙың, яҙыусыларыбыҙҙың икенсе яртыһы икенсе милләттән булып, улар үҙ балалары менән рәхәтләнеп үҙ телендә аралашып йәшәү бәхетен күрмәне. Хәҙерге йәштәр был яҡтан бик бәхетле. Улар үҙ балалары менән үҙ телендә аралаша, балаларына онотолоп барған боронғо матур исемдәрҙе ҡушалар, дин тоталар, мәсеттәргә

# Өфөгә килһә...

## "Киске Өфө"гә борор ине

йөрөйҙәр. Тағы ла Өфө башҡорттарының үҙ йолалары, традициялары барлыҡҡа килде, йәш башҡорт милли интеллигенцияһы ҡатламы формалашты. Улар менән "Киске Өфө" гәзите аша даими рәүештә танышып барабыҙ. Был йәһәттән беҙ гәзитте баш ҡалабыҙҙың йәш зыялылары менән бәйләгән бер күпер итеп күрәбеҙ.

Өфөнөң эсте бошорған күренештәре хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәктер. Сит телдәге яҙыуҙар йылдан-йыл күбәйә бара баш ҡалала. Беҙҙең халыҡҡа ят булған тәртипһеҙ күренештәр ҙә бар. Тағы ла ҡайһы бер ҡала интеллигенцияһының милли матбуғатҡа битарафлығы аптырата. Улар нишләптер милли матбуғатты ауыл кешеһе генә яҙҙырып уҡырға тейеш тип уйлай.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА:** "Киске Өфө" ҡала һәм баш ҡала гәзите генә түгел, ул республика гәзите лә. Шулай булмаһа, төпкөлдә ятҡан беҙ уны үҙ күреп уҡый алыр инекме? Ә Өфөгә килгәндә, мин тәүге тапҡыр аяҡ баҫҡан Өфө ябайыраҡ, тынысыраҡ, кешеләре лә алсағыраҡ, урамдары ла иркенерәк һымаҡ ине. Бәлки, үҙем бәләкәйерәк булғанға шулай тойолғандыр. Заман башҡа - заң башҡа. Бөгөн Өфө замандан артта ҡалмай, үҫә, үҙгәрә, матурая.

Был ҡалаға мин бала саҡта дауаханаға килгәндә тәү тапҡыр аяҡ баҫһам, аҙаҡ шунда уҡыу бәхете лә тейҙе. Бәхете тейҙе генә лә түгел, ул минең тормошҡа ҡарашымды үҙгәртте, яңы дуҫтар таптым. Баш ҡалала алған белемем миңә эш бәхетенә юл асты, тип әйтә алам. Салауат һәйкәле янындағы киске уйындар, әхирәттәр үҙҙәре генә ни тора! Дөйөм ятаҡтар яғынан эңергә ҡарай йәштәр, студенттар төркөм-төркөм булып шул тарафҡа ағылыр ине. Йәшлегемдә мин гиҙгән юлдарҙы инде минең студент ҡыҙым ҡыҙыра...

**▸ Хәҙер диалогтар заманы, илдәр, ҡитғалар, милләттәр, хатта республика менән республика, ҡала менән ҡала араһындағы эшлекле мөнәсәбәттәрҙе ҡара-ҡаршы ултырып, диалогтар ҡороп хәл итеү заманы. Ошо йәһәттән беҙҙең гәзиттәге диалогтарҙы нисек баһалайһығыҙ, ниндәй темаға диалог ҡорорға теләр инегеҙ?**

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН:** Гәзит биттәрендә алып барылған диалогтарҙы бик юғары баһалайым. Унда халҡыбыҙҙың зыялыларын борсоған бик күп мәсьәләләр күтәрелә, проблемалар ҡуҙғатыла, бихисап ҡатмарлы һорауҙарҙың яуаптары табыла. Уларҙы уҡып, ҡайһы саҡта башҡа шундай уй ҙа килеп ҡуя: милләтебеҙҙең алтын ашыҡ кеүек ир-аҙаматтарын һәм аҫыл ҡыҙҙарын борсоған ул проблемаларҙың асылы, һис юғында, төп мәғәнәһе дәүләт власы органдарында юғары вазифалар биләгән иләймәндәрҙең ҡолағына барып етә микән (әлбиттә, урыҫ теләндә тәржемәлә)?

Киләсәктә халыҡтарҙың һәм милләттәрҙең хоҡуҡтары, социаль тигеҙлек, ваҡытында Башҡортостандағы административ-территориаль бүленештәге ғәҙелһеҙлектәр (мәҫәлән, Белорет районы биләмәләренә 5-6 Йәрмәкәй районы, Баймаҡ районы биләмәләренә 3-4 Шаран районы һыя алыуын нисек аңлатырға?), әҙәбиәткә, кадрҙар сәйәсәтенә ҡағылышлы мәсьәләләр тураһында диалогтар ҡоролоуын теләр инем. Бындай йәнле һөйләшеүҙән власть вәкилдәре лә ситтә ҡалмаһын ине, сөнки улар ҙа халыҡтың бер өлөшө бит.

**Вәкил ХАЖИН:** Диалогтарға ҡарашым бик тә ыңғай. Милли ихтыяждан сығып алынған теләһә ниндәй тема ла диалог нигеҙе була ала. Беҙҙе борсоған мәсьәләләр (эскелек, эшһеҙлек, буйҙаҡлыҡ, маңҡортлоҡ, һаулыҡ һаҡлау, тәбиғәтте һаҡлау һ.б.) мәҙәниәткә, тарихҡа, телгә, шәхестәргә ҡағылышлы темалар буйынса һөйләшеүҙәрегеҙҙе артабан да дауам итерһегеҙ, тип көтәм.

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА:** Диалогтарҙы уҡырға ҡайһы берҙә ябай кешенең ваҡыты ла, түҙемлеге лә етмәй. Шуға күрә уларҙы ҡыҫҡараҡ итеп бирергә кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта гел ғалимдарҙың, аҡыл эйәләренең генә түгел, ябай кешеләрҙең фекерҙәре лә ҡыҙыҡлы булыр ине.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА:** "Киске Өфө" үткәргән диалогтар көнүҙәк, халыҡты борсоған темаларға арналыуы менән бик әһәмиәтле. Киләсәктә лә ил, ер яҙмышы, көнитмешебеҙ хаҡында әңгәмәләр уҡырбыҙ тип өмөтләнәм. Был әңгәмәләрҙә ауылдарыбыҙҙа йәшәгән ябай малсы, тракторсы булып эшләп, пенсияға сыҡҡан халыҡ араһында намыҫлы хеҙмәте менән абруй яулаған аҡһаҡалдарыбыҙҙың, үҙҙәренең булмышы менән ил инәһе булған ағинәйҙәрҙең дә фекерен ишетке килер ине. Сөнки халыҡ аҡылы - мең алтын. Тыумыштан зиһенле, ныҡ башлы булып, юҡсыллыҡ арҡаһында юғары белем ала алмаған аҡыллы кешеләр бихисап бит ул.

***Киләсәктә лә ил, ер яҙмышы, көнитмешебеҙ хаҡында әңгәмәләр уҡырбыҙ тип өмөтләнәм. Был әңгәмәләрҙә ауылдарыбыҙҙа йәшәгән ябай малсы, тракторсы булып эшләп, пенсияға сыҡҡан халыҡ араһында намыҫлы хеҙмәте менән абруй яулаған аҡһаҡалдарыбыҙҙың, үҙҙәренең булмышы менән ил инәһе булған ағинәйҙәрҙең дә фекерен ишетке килер ине. Сөнки халыҡ аҡылы - мең алтын. Тыумыштан зиһенле, ныҡ башлы булып, юҡсыллыҡ арҡаһында юғары белем ала алмаған аҡыллы кешеләр бихисап бит ул.***

**▸ Хәҙер барыһы ла интернет донъяһына баш тыға, гәзиттәребеҙҙе лә хатта интернеттағы сайттан уҡып ҡына мөрхәтһенгәндәр бар. Киләсәктә ҡағыҙ баҫмалар интернеттан йотолор икәненә ышанаһығыҙмы? "Киске Өфө" гәзитенә ошо конкуренцияла еңелеп ҡалмаҫ өсөн тағы ла нисегерәк ижад итергә кәрәк, тип уйлайһығыҙ?**

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН:** Бик сетерекле һорау. Цивилизация тарихы өҙлөкһөҙ үҙгәрештәрҙән тора. Мәҫәлән, беҙҙең быуын кешеләре телевидениеның кино индустрияһы менән театрҙы ҡыҫырыҡлауының тере шаһиты булды. Йәнә беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа әлеге интернет ҡағыҙ баҫмаларға аяуһыҙ һөжүм итә. Ә бит шул уҡ китап баҫыу, йәғни, нәшриәт үҙе бынан ике йөҙ йыл элек кенә архитектураның башына етә (В. Гюгоның "Собор Парижской богоматери" романындағы : "Книгопечатание убьет зодчество" тигән фекерҙе иҫләйһегеҙҙер, моғайын). Бындай миҫалдарҙы көнкүрештән, рухи һәм матди культура өлкәһенән бик күп килтерергә мөмкин. Шуға күрә, ҡағыҙ баҫмаларҙың интернет тигән ғәләмәттән йотолоп ҡуйыуы ла ихтимал. Шәхсән минең фекеремсә, ул тиҙ арала ғына булмаҫтыр. Әммә, донъя беҙгә тағы ҡайһы яғы менән әйләнер, тигән фараздан сығып, гәзиттең тулы электрон версияһын әҙерләй барыу хәстәрлеген күргәндә бер ҙә насар булмаҫ ине.

**Вәкил ХАЖИН:** Интернет - ул замана шауҡымы. Бөгөн ул уңайлы, ул ҡулай. Шулай ҙа, минең уйлауымса, ҡағыҙ баҫманың алдағы ғүмере әлегә оҙон. Ҡасандыр меңәр йылдар буйы ташҡа, папирусҡа, пергаментҡа, туҙға яҙғандар. Хәҙер мең йыллап инде ҡағыҙға яҙалар. Һәм тағы ла бик оҙаҡ яҙырҙар әле, сөнки ҡағыҙҙа мәғлүмәтте һаҡлауы ла уңайлыраҡ, ышаныслыраҡ.

Халыҡты борсоған һорауҙар, проблемалар, мәсьәләләр күтәргән, маңҡортлоҡ һаҙына батмағандарҙың күңеленә май булып яғылырҙай баҫмаға Интернет конкуренцияһы, моғайын, әлегә янамайҙыр.

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА:** Ҡағыҙҙың, китаптың меңәр йыллап тарихы бар. Интернет, әлбиттә, ҡапыл ғына мәғлүмәт алыу өсөн уңайлы, ләкин ҡапыл ғына, анһат ҡына табылғандың ҡәҙере лә, ғүмере лә ҡыҫҡа. Беҙ, ғөмүмән, ҡапыл ғына мәғлүмәт алыу өсөн йәшәмәйбеҙ. Интернет аша алынған мәғлүмәт кешене һиҫкәндерергә мөмкин, әммә уйландырмай. Китапты үҙ ҡулыңа тотоп бер уҡыйһың, икенсегә уҡыйһың, ҡайһы берҙә ваҡыт үткәндән һуң китапты һалып ҡуйған ерҙән алып, тағы ла иҫеңә төшөрәһең. Шуға күрә аҡҡа төшкәндең баһаһы бер ваҡытта ла кәмемәҫ, тип уйлайым.



Гәзит уҡыусылар йылдан-йыл алышынып, үҫеп тора. Шуға күрә ҡайһы ғалимдарҙың, зыялыларҙың аҫыл һүҙҙәрен, фекерҙәрен гәзиттә киренән баҫыу ҙа артыҡ булмаҫ ине. Беҙ үҙебеҙҙең китапханала гәзиттең йыллыҡ һанын йыйып барып, "Киске Өфө" китабын сығарып барабыҙ. Уларҙы асып уҡығанда ҡайһы бер мәҡәләләрҙе киренән баҫтырыу зарурлығын тояһың. Ни өсөн тигәндә, беҙ яратҡан китаптарыбыҙҙы киренән асып уҡыйбыҙ бит, тап шуның кеүек. Яратҡан йырҙарҙы ла ҡабатлап йырлағанда мәғәнәһе кәмемәй. Шуға күрә, "Киске Өфө" туплаған аҡылды, тәрән мәғәнәле материалдарҙы беҙ юғалтмаҫҡа тейешбеҙҙер, тип уйлайым.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА:** Интернет, замана технологиялары нисек кенә алға китмәһен, ҡағыҙ баҫмаларға ихтыяж бөтөнләй үк бөтмәҫ, тип уйлайым. Быны мин көн һайын интернет донъяһын гиҙгән кешеләрҙең береһе күҙлегәнән әйтәм. Электрон варианттағы әҫәрҙәр йәнһеҙ, яһалма кеүек тойола миңә. Ә аҡҡа баҫылған мәҡәләнең йәки әҫәрҙең йәне, ҡото бар һымаҡ. Бәлки, бала саҡтан өйрәнгәнгәлер.

"Киске Өфө" ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында шундай популярлыҡ яулай алған икән, тимәк, уның иртәгәһе бар тигән һүҙ. Гәзиттең тотош республика буйлап таралыуын иҫәпкә алып, урындарҙан булған материалдарға ла ҙурыраҡ урын бүлеү, төпкөлдәрҙә йәшәгән аҫыл затлы кешеләр хаҡында ла күберәк яҙыу фарыздыр тигән фекерҙәмен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҙур әйберҙәр алыҫтаныраҡ аныҡ күренә", тине Вәкил Исмәғил улы Хажин. Мәңгелек ваҡыт иҫәбенән сығып ҡарағанда, 10 йыл ваҡыт күҙ асыпйомған араға ғына тиң. Шул ваҡыт арауығында "Киске Өфө" гәзите уның әүҙем авторҙары һәм уҡыусылары әйткәнсә, кешенең күңеленә ғәм, сәм, өмөт, рух орлоҡтары һалып өлгөргән икән, тимәк, ошо ун йыл, тарихи күҙлектән ҡарағанда, баҫманың уңышлы үткәне тип иҫәпләнергә хаҡлы. Әгәр ҙә "Йәшәүемдең йәменә, мәғәнәһенә әүерелде "Киске Өфө"гәзите", тип йәшәүсе уҡыусыларыбыҙ бар икән, был да хеҙмәтебеҙҙең бушҡа түгелмәгәнен, һүҙҙәребеҙҙе һыуға һалмағаныбыҙҙы раҫлай.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әҙерләне.**

***✓ Уйламаған ерҙә иңенә емерелеп төшкән әлеге бәхеткә - үҙенең, ниһәйәт, азат донъяға аяҡ баҫыуына - ул һаман булһа ышанып етмәй кеүек. Хәҙер уны бар булмышы тик алға әйҙәһә, өмөт тулы киләсәгә сикһеҙ рухландыра.***




Аһ, Урал сауҡалары, нисегерәк һағынғанымды белһәгеҙ икән! Олатаһы ҡасандыр өйрәткән ошо йыр уның ярһыған йөрәгенә ял бирһә, артабанғы йәшәйешенә сәмле дәрт өҫтәй. Егеттең зар тулы моңон ишеткән Уҡабикә йәшерен генә күҙ йәштәрен һөртөп ҡуя...

Ошондай кистәрҙең береһендә Ғайса янына Астан килеп ултырҙы.

-Ҡыйынмы, ҡустым? - ул егеттең һағыш тулы күҙҙәренә ҡараны.

-Ҡыйын, ағай, эс яна, йөрәк әрней...

-Һарғайып үләҫең бит...

-Былайтып йәшәгәнсе, үлгәнең мең артыҡ!

-Аңтайым...

-Һин аңлайһың да ул...

Ошо урында ауыр һәм йәпһеҙ тынлыҡ урынлашты. Уйһылыҡ эсендә боҫоп ятҡан ҡышлаҡ яғынан һирәк-һаяҡ ләүкелдәп эт өргәне генә ишетелеп ҡуя. Ә, тағы, ана, ҡолаҡҡа яңғыҙ ҡыҙ йыры салынып ҡала. Уныһына инде күнегеп бөтөлгән, шунлыҡтан иғтибар ҙа итмәйҙәр. Ас бүреләр ҡуйҙарын тәләфләмәһен өсөн Сынға бей бер әкәмәт уйлап тапты: уның ҡаты фарманына ярашлы, төн һайын бер ҡыҙ туҡтауһыҙ йырлап сығырға тейеш. Бейҙең уйынса, ул ҡыҙ йыры менән, берҙән, оңҡот йыртҡыстарҙы ҡурҡытһа, икенсенән, йоҡлап ятҡан ҡышлаҡҡа ла күҙ-ҡолаҡ була. Кем сиратты боҙа - язаға тарттырыла. Ғәжәп бит! Ниҙәргә генә бармай үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртҡан бәндә. Әлеге туҙға яҙмаған ҡыҙҙар ҡарауылы менән Ғайса һис килешә алмай. Уның илендә бит һаҡта гелән ир-егеттәр тора. Аслыҡ сикһеҙлеккә килтереп еткергән бүре көтөүе килеп баҫҡан хәлдә ҡыҙ кеше, сәрелдәүҙән башҡа, ни эш ҡыра ала? Ә инде мәкер юлбаҫарҙар хаҡында әйтеп тораһы ла түгел...

- Ишетәҫеңме йырҙы? - Астан Ғайсаның уйҙарын бүлдерә.

- Ишетмәгән ҡайҙа...

- Иртәгә минең ҡыҫтың сираты...

- Шунан? - Ағаһының тел төбөн аңларға тырышҡан Ғайса боролоп уға ҡарай һалды. - Быныһ менән нимә әйтмәксеһең?

- Юҡ, ҫин уйлағанты түгел, - Астан көрәк дәүмәллек ҡулы менән егеттең яурынынан ҡосаҡланы, - хәйер, теләҫәң шәп кейәү булыр инең тә ул...

- Арыҫланғәле ағай, ул хаҡта башҡаса һүҙ ҡуҙғатмайыҡ, тип күпме тапҡыр ҡабатларға була? Өҙгөләмә йәнемде, зинһар.

- Биғәйбә, өндәшмәйсә түҙә алмайым. Йәлҫең...

Ҡарашын бер нөктәгә төбәгән Астан уйға батып ултырҙы. Ахырҙа, төнгө бур ише янъяғына ҡаранып алды ла, йәнә һүҙ башланы. Был юлы мыштым ғына:

- Ҡарале, Ғайса, иртәнге кис, ай ҡалҡҡан мәлдә, ат ҡураҫы артына килерҫең. Унта, ышыҡта, эйәрле Йондоҙҡашҡа торор. Төшөнәҫеңме? Әйтеүемсә, ҡарауылта минем ҡыҫ булыр. Ул өндәшмәҫ...

Ҡапылғара аңшайып киткән Ғайса, аптырауҙан асылған ауыҙын ябырға ла онотоп, Астанға текләгән көйө ҡатты ла ҡалды: ысынды ишетәме ҡолаҡтары, әллә юҡтымы? Ә тегеһе бер ни булмағандай дауам итте:

-Атты мен тә ҡояш батышына ҡарай елдер. Хәтерләп ҡуй: көндөҙөн күләгәң гелән алда булһын. Онотоп ҡуйма! Барыһы ла ыңғай барһа, өс тәүлек тигәндә Яйыҡ йылғаһы ярҙарына сығарһың. Аръяғына инте үҙебеҫтең ерҙәр. Үҙ ереңтәге юлты күҙ менән тел таба ул. Тик был яҡта кеше күҙенә салынырға тырышма. Бел: был яҡ кешеләре башҡорттар ише түгел... Барлыҡ кәрәк-яраҡ эйәргә эленгән тоҡсайҙа.

-Ә һинең үҙеңде ни эшләтерҙәр, Арыҫланғәле ағай? Эйәрле ат бит һинеке. Шунда уҡ һиҙәсәктәр...

Тотолмаһаң, бер ни ҙә булмаҫ. Тотолмаған - бур түгел. Атты урлап ҡаҫҡан, тиермен. Ә инде тотола ҡалһаң, икебеҫтең дә баш китәр...

Шаҡ ҡатып ултырған Ғайса, ниһәйәт, һушына килде шикелле, шатлығынан бар донъяһын онотоп, һикереп торҙо. Торҙо ла, үкчәһенә кинәт меңәрләгән энә ҡаҙалып, ҡот осҡос ауыртыуҙан ҡапыл ғына кире сүгәләй һалды һәм тешен ҡыҫып ыңғыраша ҡуйҙы: "Ыһ-һ!".

-Абай бул, Ғайса, кәрәкмәгәнгә алабарманланып мәғәнәһеҙ ҡыланма. Йәнә лә... Ҡайтып еткәс, тыуған тупраҡты минең өсөн тә ҡосоп үберҫең, - тулҡынланыуҙан Астандың тауышы ҡалтыранып китте, - атыңа менгәндән һуң ҡабат артыңа әйләнеп ҡарама. Ярай, бәхил бул... Бәхетле бул...

-Риза булып ҡал, Арыҫланғәле ағай...

-Хәйерле юл, башҡорт! - Ғайсаны ҡыҫып ҡосаҡлаған Астан егеттең арҡаһынан ҡаҡты. - Милләт бәҫен төшөрмә шулай...

* * *

Иртәнге эңерҙә йоҡомһорап ятҡан ҡышлаҡтың тынғыһыҙ эттәре менән Астан ҡыҙы Уҡабикәнән башҡа Ғайсаның сығып киткәнен бер кем һиҙмәне лә, күрмәне лә. Уны моңһоу ҡараштары менән оҙатып ҡалған ҡыҙҙың һағышлы йыры оҙаҡ ҡына ишетелеп торҙо. Башта атын ҡабаландырмай ғына үтә һаҡ барған Ғайса бер аҙҙан юрттырыуға күсте. Күҙҙәре ут булып янған егеттең ярһыған йөрәге дарҫлай, күңеле елкенә: уның менән булып ятҡан бөгөнгө ғәмәлдәр ысынмы, бушмы? Әллә бер татлы төш кенәме? Уйламаған ерҙә иңенә емерелеп төшкән әлеге бәхеткә - үҙенең, ниһәйәт, азат донъяға аяҡ баҫыуына - ул һаман булһа ышанып етмәй кеүек. Хәҙер уны бар булмышы тик алға әйҙәһә, өмөт тулы киләсәгә сикһеҙ рухландыра. Үксәһендәге уңалмаҫ йәрәхәте лә бөгөн һис ҡамасау түгел, сөнки уның аты бар! Ул һыбай атланған! Ә өҙәңгегә аяҡ остары менән генә баҫып бара. Йөрәге урынынан ҡубып, тыуған яҡтарына тиҙерәк ҡайтып етеү теләге менән янған ҡасҡын шыйыҡ болоттар араһында йөҙгән айға самалап барҙы ла барҙы. Хәҙер инде тояҡ тауыштарын ишетеп ҡалыуҙан ҡурҡмаған Ғайса юрттырып та, саптырып та атын ҡыуҙы. Яҡтыра башлағанда ул, ҡулай урын һайлап, бер аҙ ғына баш-күҙ алырға ҡарар итте. Юғиһә, һәр саҡ көсөргәнә килгәнлектәндер инде, үҙәккә үткәреп табандары һыҙларға тотондо. Әүәлгесә, хас малай сағындағы һымаҡ, атын арҡанлап үҙ аяғына бәйләне лә моҡсайҙы систе. Танауына шундуҡ ҡаҡланған ит еҫе килеп бәрелеүҙән буш ашҡаҙаны ныҡ ҡына бороп ҡуйҙы. Олатайы ҡасандыр: "Аҙ ашаһаң, тағы ашарһың, күп ашаһаң, ни ашарһың", - ти торғайны, сама белгәндә, ризығы өс-дүрт көнгә еткәндәй икән. Арыҫланғәле ағайға рәхмәттән башҡа ни әйтәһең, анауындай ҙур ғаиләһе ауыҙынан өҙөп, күпме тәғәм һалған, яртылаш ҡымыҙ тултырылған турһығын да онотмаған. Эй-й, хәстәрле кеше хәстәрле булып ҡала инде ул. Етмәһә, ике бөртөк атының береһен тотторор ебәрҙе.

Ғайса, йәтеш кенә турһыҡтан сөсө ҡымыҙ уртланы ла, ары ҡуҙғалды. Ул хәҙер бер урында оҙаҡ ултырып сыҙай алмай ине. Ул ярһый, ул ашҡына! Уны тотоп та, тыйып та тотор көс юҡ! Бара биргәс, башы етеп, моҡсайын да, турһығын да арҡаһына артмаҡлап алды. Былай ҡулайыраҡ. Ашамлығы, ул яҡҡа ла был яҡҡа ла бәрелә-һуғыла, эйәрҙә сайҡалып та килмәй. Ҡул аҫтындараҡ булһын, типме, ҡынлы бысаҡты биленә ҡыҫтырҙы. Уныһын да Астан һалғайны. Хәҙер ул Йондоҙҡашҡаны борсомаҫҡа тырыша: атҡа ла ял кәрәк. Уныһы, башын уңлы-һуллы ташлаштырып, юлында осраған бейегерәк үлән остарын өҙә килә. Ана бит, бер ыңғайҙан тамағы ла ялғана. Ҡороған күл урынында эсәр һыуы ла табылды. Көнө салт аяҙ булғанлыҡтан, аҙашып китермен, тип тә хафаланмай, сөнки күләгәһе һәр саҡ алдан бара.

Эҙәрләүҙән үҙен тамам ҡотолғанға һанап тыныслана төшкән Ғайса, хәүеф-хәтәр тулы сәфәренә өс тәүлек тигәндә, таҡыр башлы ҡалҡыулыҡҡа килеп сыҡты. Бына, инде тауҙар ҙа күренә башланы түгелме? Ҡалҡыулыҡ түбәһенә менеп туҡталған ҡасҡын, әҫәрләнеп, ян-яғына ҡаранды һәм... һынташ ише ҡатты ла ҡалды. Сөнки алыҫта-алыҫта ҡаҡ дала туҙаны борхоғанын шәйләне. Бәй, уның артынан бер нисә һыбайлы саба түгелме? Аһ, шайтан, күңеленә баянан бирле ниҙер һиҙелә ине шул! Йөрәге жыу итеп ҡалған Ғайса, уйламаҫтан, тыныс ҡына торған атының ҡабырғаһына типте. Үҙе, хатта, үксәһенең нык зәңкегәненә лә иғтибар итмәне. Көтөлмәгән тупаҫ мөғәмәлә тертләткән Йондоҙҡашҡа ер аҡтарып алға йомолдо ла, ел еткермәй сабып китте. Юҡ, сапманы, тояҡтары ергә тейер-теймәҫ осто ғына. Шулай ҙа ҡыуғынсыларҙың аҫыл зат һайланма арғымаҡтары етеҙерәк ине: ара күҙгә күренеп ҡыҫҡара барҙы. Бер аҙҙан аҡ күбеккә төшкән ябай тоҡомло Йондоҙҡашҡаның хәле мөшкөлләнде. Ошо мәл алдарында кинәт сағым йәйелеп китте. Хәйер, сағым тигәне бөтөнләй сағым булмай сыҡты, ә йәйрәп ятҡан Яйыҡ һыуы икән! Йылғаны аша сығып өлгөргәндә... Бәлки, теге ярҙа үҙебеҙҙекеләр...

Шулай уйлап хыялланған хужаһын ҡурсылау хаҡына йәнен аямаған Йондоҙҡашҡа, бар көсөнә сабып килгән ыңғайға, һыуға сумды ла, артабан йөҙөп китте. Шул әҙере эйәрҙән төшә һалған Ғайса теҙген осона йәбеште.

Ошо рәүешле ат менән кеше оло йылғаның уртаһына еттеләр. Ҡамыш ҡаплаған ҡаршы ярға инде күп тә ҡалманы. Ләкин... Ни булды? Ҡуршһарш килә башлаған ат йөҙөүҙән кинәт туҡтаны. Туҡтаны ла, әкрен-әкрен генә бата башланы. Күрәһең, тирләгән көйө һалҡын һыуға ҡапыл инеүҙән уның тәне тартышты ла ҡуйҙы. Ҡапылғара ҡаушап киткән Ғайса уны теҙгененән һөйрәп маташҡан булды. Ҡайҙа ул!

- Йондоҙҡашҡа-а! Нишләйһең һи-ин?.. - Һил Яйыҡ буйын асырғанып ҡысҡырған Ғайсаның тауышы тетрәтте.

Ә күҙҙәре самаһыҙ таҫырайып киткән меҫкен ат үҙәгенә һыу китеүҙән сәсәп сәбәләнде. Бына аҡтыҡ көсөнә тыпырсынған хайуандың ҡашҡалы маңлайы һыу өҫтөндә һуңғы тапҡыр күренеп ҡалды ла... юҡ булды. Яйыҡ йылғаһы шулай итеп Йондоҙҡашҡаны мәңгелеккә йотто.

Шул арала килеп еткән ҡыуғынсылар тантана итә ине. Теге яҡ ярҙа торған әҙәмдәр хәҙер атһыҙ ҡалған Ғайсаның үҙ ҡулдарында икәнлегенә тамсы ла шикләнмәй. Шикләнеүен шикләнмәй, әммә ләкин... Ҡасҡындары ҡалҡына биреп һыуға сумды ла, шул сумыуҙан ғәйеп булды ла ҡуйҙы. Бөтөнләйгә! Баҙап ҡалған һыбайлылар байтаҡ ваҡыт тексәйешеп торһалар ҙа йылға өҫтөнә ҡалҡып сығыусы булманы. Яйыҡ быныһын да йотто, буғай. Аптырашып күпмелер көткәндән аҙаҡ һыбайлыларҙың төркөмдән айырылған икәүһе ҡаршы ярға табан йөҙҙө.

...Сәмләнеп киткән Ғайса йылға төбөнә тейер-теймәҫ барҙы ла барҙы: ҡабатлап улар ҡулына ҡапҡансы, тонсоғоп үлеүең артыҡ. Бына-бына тыны бөтә инде тигәндә, көтмәгән ерҙән, башы һай урынға төртөлдө лә, һирәк ҡамышлыҡ эсенә килеп сыҡты. Ул ҡомһоҙланып һауа һулаған ыңғайға, алан-йолан килеп ян-яғына ҡарарға ла өлгөрҙө. Теге икәү ҡамышлыҡҡа етеп килә, әммә уны шәйләмәнеләр һымаҡ. Йылға ситенә етеү менән улар ике яҡҡа айырылды. Хәйерһеҙ, уңға боролғаныһының күреп ҡалыуы бар. Бысағын ҡулына ала һалған Ғайса уның мөгөҙ һабын ҡыҫып тотто: ошо урында башын һалһа һалыр, ләкин хәсистәргә тере көйө бирелеү юҡ!

Бына хәсистәрҙең береһе уның тәңгәленә етте һәм һирәк кенә сибек ҡамыш араһында суҡайып торған башты шунда уҡ шәйләп тә алды. Шәйләне лә, ҡатҡан көйө, өндәшмәй өнһөҙ-тынһыҙ торҙо. Ул, күрәһең, ошо мәл Ғайсаның күҙҙәрендә сикһеҙ нәфрәт ҡатыш ялбарыу күрҙе. Шул уҡ ваҡытта егетте йәлләп тә ҡуйҙы.

-Күренмәйме шул? - Ҡамышлыҡтың арғы башынан икенсе һыбайлының ҡарлыҡҡан тауышы ишетелде.

Бына ул ғүмереңдең хәл иткес миҙгеле! Бер генә миҙгел! Күҙ асып йомғансы ғына ара! Хәҙер барыһы ла күҙҙәреңә уҫал текләгән дошмандан тора. Уның бер генә һүҙе һинең бөтә яҙмышыңды хәл итә. Һәм ул:

-Жоҡ... - тип яуап бирҙе, - жоҡ ул мында.

-Тонсоҡҡандыр ғой.

Ғайсаға ҡарап хайран ҡалып торған ҡамсат бүрекле һыбайлының ҡарашы ул ҡәҙәре үк уҫал түгел ине... Ана, хатта йылмайғандай итте түгелме?..

Бая аймылышҡан урындарында ҡабат осрашҡан һыбайлылар, аттарын йәнәшәләп, кирегә йөҙҙөләр. Уларҙың ҡамсат бүрек кейгәне Арыҫланғәленең өлкән улы Байым ине. Байым, күрәһең, атаһы ҡушыуы буйынса, Ғайса менән шул рәүешле ҡарашы аша ғына хушлашты.

**(Дауамы бар).**

*Ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған изге аманат - сәләмләшеү йолаһының боҙолоуы һәм уның мәғәнәһеҙ һорау алышыуға әйләнеп ҡалыуы күңелһеҙ күренеш, әлбиттә. Хәйер, хатаны төҙәтеү бер ҡасан да һуң түгел.*

ФӘҺЕМЛЕ ҺҮҘ

# СӘЛӘМ БИРЕҮ

## етмеш сауапҡа тиң



**Исәнләшеү һәр халыҡта ла әҙәплелектең беренсе билдәһе булып иҫәпләнә. Мосолман кешеһе сәләмләүгә айырыуса ҙур әһәмиәт бирә. "Сәләм биреү етмеш сауап менән бүләкләнә", тип яҙып ҡалдырған сәхәбәләрҙән берәү. Сәләм биреүҙең мөһимлеге хаҡында Ҡөрьәндә лә бер нисә урында әйтелә. "Ә инде үҙегеҙгә сәләм бирһәләр, һеҙ уларға үҙҙәре биргән сәләмдән яҡшыраҡ, йәки, һис булмаһа, үҙҙәре кеүек үк сәләм бирегеҙ. Аллаһ һәр нәмәне иҫтә тота", тиелә аяттарҙың береһендә.**

Ғөмүмән, сәләм биреү, исәнләшеү ер йөҙөндәге һәр бер халыҡтың, шул иҫәптән башҡорттоң да, иң матур йолаһы. Миҫалға арҙаҡлы яҙыусыбыҙ Яныбай Хамматовтың романынан ошондай өҙөк: "Бер төркөм малай-шалай эйәрткән Буранбай ҡапҡа алдында күренде. Тыныс ҡына ултырыусы ҡунаҡтар барыһы ла бер юлы, алдан һүҙ беркетеп ҡуйған шикелле, урындарынан күтәрелешеп, уға ҡаршы атланы.

- Әссәләмәғәләйкүм!

- Вәғәләйкүмәссәләм!

- Исән-һау ғына йәшәйһегеҙме, ағай-эне!

- Беҙ Аллаға шөкөр, ҡапыл да арыу, үҙең ни хәлдә!

- Мин дә арыу, - тип ҡысҡырҙы Буранбай".

Күреүебеҙсә, исәнләшеү йолаһы осрашыуҙың иң матур, хатта ниндәйҙер кимәлдә тантаналы бер өлөшө булып тора. Башҡортта исәнләшеү логик бөтөнлөккә эйә. Әйтәйек, кемдер һинән "Һаумы әле?", тип исәнлегенде һорай икән, мотлаҡ "Арыу әле, һау ғынамын", тип яуап биреү кәрәк. Артабан әҙәплелек ҡағиҙәһе шуны талап итә - һин дә "Үҙең ни хәлдә?" тип, сәләмләүсенең һаулығын һорашырға тейешһең. Хәҙер инде башлап сәләм ҡуйыусы яуаплай: "Яҡшы, арыу, көрлөк... " Ауылда бына ошолайыраҡ сәләм бирешә ине өлкәндәр, хәйер, унда әле лә шулай.

- Шәпме, әбей?

- Арыу әле, ҡыҙым, үҙең исәнме?

- Аллаға шөкөр.

- Ярай, исән йөрө, бәхет-тәүфиҡлы бул, - шундайыраҡ һәм тағы ла әллә ниндәй теләктәр теләп ҡала һаулыҡ һорашҡан кеше.

Ә хәҙер беҙҙең, ҡалаға килеп төпләнеүселәрҙең, исәнләшеүен тыңлайыҡ:

-Һаумы?

-Һаумы...

Шуның менән - вәссәләм. Әйтерһең дә, сәләмләүебеҙ ҡайтауаз булып үҙебеҙгә кире ҡайта. Һорауға ҡаршы - һорау, һәм ул һауала аҫылынып ҡала. Бәлки, һеҙ, бер-берегеҙгә ошондай сәләм биргән кешеләр, бер-берегеҙ менән һөйләшеүгә, аралашыуға, бер-берегеҙҙең ярҙамына мохтаждыр — был асыҡланмай ҡалды. Кешеләрсә исәнләшһәгеҙ, матурыраҡ аралашыу килеп сығыр, мөнәсәбәттәр йылыныр ине...

Ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған изге аманат - сәләмләшеү йолаһының боҙолоуы һәм уның мәғәнәһеҙ һорау алышыуға әйләнеп ҡалыуы күңелһеҙ күренеш, әлбиттә. Хәйер, хатаны төҙәтеү бер ҡасан да һуң түгел. Балаларыбыҙҙы, исмаһам, дөрөҫ итеп исәнләшергә өйрәтәйек әле.

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ШӘХЕСТӘР ТӘРБИӘЛӘҮСЕ

**Йәмғиәтебеҙ ҙур үҙгәрештәр кисергән осорҙа халҡыбыҙҙа башҡортлоҡто нисек итеп һаҡлап ҡалырға һуң? Был һорауға яуап бирерҙәй саралар күп, әммә шулар араһынан "Киске Өфө" гәзитен айырып әйтер инем.**

Баланы бишектән тәрбиәлә, тигәндәй, халҡыбыҙҙы тәрбиәләүҙә гәзитебеҙҙең өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Ул балаға мәғәнәле башҡорт исемдәре ҡушыуҙан алып, аяҡта ныҡ баҫып торорҙай һынмаҫ рухлы, көслө характерлы, халҡындың бай тарихына, ғөрөф-ғәҙәтенә, бөгөнгө хәленә, киләсәгенә битараф булмаған, үҙ иленә файҙа килтерерҙәй заман менән бергә атлаған йүнсел, алтын ҡуллы, айыҡ тормош алып барған иманлы, тәрбиәле, мәҙәни шәхес формалаштырыусы ла булып тора. Гәзит нәшер ителә башлағандан алып ғаиләбеҙ менән һәр һанын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барабыҙ. Уҡытыусы булараҡ, гәзит минең айырылғыһыҙ дуҫыма әүерелде. 10 йыл эсендә "Киске Өфө" гәзите милләтебеҙҙең рухи аҙығына әйләнде, тип әйтә алам.

**Римма ТИМЕРБУЛАТОВА,**
**Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ҮҘ ИЛЕҢДӘ...

## солтанмы, олтанмы?

**"Киске Өфө" гәзитен күптән алдырам. Бер һүҙен дә ҡалдырмай уҡыйым, күршеләргә һөйләйем. Бәхәстәр, әңгәмәләр, диалогтар оҡшай. Бәхәстәрҙе ҡурҡмай, тартынмай бирергә кәрәктер. Ул уҡыусыларҙы әүҙемләштерә.**

Бер саҡ "Сит ерҙә олтан булғансы, үҙ илендә солтан бул" тигән мәҡәл дөрөҫмө, әллә "Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илендә олтан бул" дөрөҫмө?" тигән бәхәс башланғайны, ни өсөндөр туҡтап ҡалды. Был мәҡәл буйынса мин дә күптән уйланам һәм үҙ фекеремде әйтәйем, тием.

Минеңсә, сит илдә йәшәгәс, әлбиттә, солтан булып йәшәргә кәрәк. Әммә сит илдәге солтанлыҡтың үҙеңдән башҡа кемгә кәрәге бар? Ә үҙ илендә һин кем генә булма, ни генә эшләмә - барыбер һин солтанһың. Кеше үҙ илендә ни эшләп олтан булһын? Үҙ иле - үҙ өйө бит уның.

Халыҡ барҙа хаҡлыҡ бар, тигән мәҡәл бар. Шуға мин дә халыҡ аҡылына мөрәжәғәт итеп, үҙ фекеремде дөрөҫләмәксе булдым һәм ошондай мәҡәлдәр таптым:

*Үҙ илең - алтын, кеше иле - тотҡон.*

*Үҙ илем - алтын бишек, кеше иле - үтә тишек.*

*Үҙ илендә кем дә бей.*

*Үҙ илеңдә ҡарлуғас булһаң да, кеше илендә ҡарға булырһың.*

*Үҙ илеңдә үҙең ҙур.*

*Үҙ йортонда алйот та хужа.*

Һәм башҡа ошондай мәҡәлдәр минең фекеремде дөрөҫләне. Шуға ла "Сит илдә олтан булғансы, үҙ илеңдә солтан бул" тигән мәҡәлде дөрөҫ тип ҡарап, ҡайһы бер китаптарҙа яңылыш яҙылғандарын төҙәтергә кәрәк.

Был мәсьәләгә ни өсөн ҡайттым? Хәҙер бит күп кенә балалар сит илдәрҙә йәшәүҙе хуп күрә һәм уларҙың атай-әсәйҙәре лә "Балам фәлән ерҙә фәлән вазифа башҡара", тип маҡтанған була. Әлбиттә, башҡарыр. Башҡорт балаһы башлы инде ул -эшләй ҙә, эшләтә лә беләә. Ә сит илдә кемгәлер хеҙмәт итеп, "олтан" булып йөрөүенән кемгә файҙа? Илгәме? Ата-әсәһенәме? Ата-әсәһенең һуңғы көндәренә тиклем балаһы менән бер һөйләшергә зар-интизар булып, хатта фани донъянан китер алда күреп ҡалыуҙан да мәхрүм булғандар аҙмы?

Беҙ мәҡәлде дөрөҫләп ҡуймаһаҡ, балаға бәләкәй сағынан уҡ яңылыш фекер һалып, яңылыш йүнәлеш бирәбеҙ. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр аҙ ғына уңышһыҙлыҡҡа юлыҡһалар ҙа, "Үҙ илемдә олтан булғансы, сит илдә солтан булам мин" тип, ҡул һелтәп сығып китеүсән була. Нисек кенә булмаһын, ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ.

**Мәрйәм СОБХАНҒОЛОВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ӘЙЛӘНӘ - ТИРӘБЕҘҘӘГЕЛӘР...

## ниндәй сифаттар тәрбиәләне беҙҙә?

**Тимер НИӘТШИН, шағир, Мәләүез ҡалаһы:** Бөгөнгө һүҙем башҡортлоҡ тураһында булыр. Башҡортлоҡ төшөнсәһен һәр кем үҙенсә аңлай. Миңә ҡалһа, бик киң даирәләрҙе үҙ эсенә алған һәм тәрән мәғәнәгә эйә булған һүҙ ул - башҡортлоҡ. Әйтәйек, башҡорт булыу - милли һыҙат булыуҙан, кешенең ҡайһы милләткә ҡарауын ғына билдәләүҙән тыш, ул кешенең күңел торошон да, уның йәшәү рәүешен дә асып бирә. Бына мин, мәҫәлән, был донъяға башҡорт кешеһе булып килгәнмен, әммә донъяға башҡорт кешеһе күҙлегенән ҡарайыммы, башҡорт булып йәшәй аламмы икән - быныһы ла мөһим мәсьәлә.

Нисек була ул башҡорт булып йәшәү? Минең уйымса, башҡорт булып йәшәү - ул, иң беренсе сиратта, ғорур, намыҫлы, төптән уйлап, аҡыллы эш итеп йәшәү ул. XXI быуат телдәрҙе, милләттәрҙе, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, диндәрҙе шул тиклем бер-береһенә яҡынайтты, бер-береһе менән аралаштырҙы, үҙ тарихыңды, үҙ ғөрөф-ғәҙәтеңде, үҙ телеңде белмәйенсә, буталып ҡалыу, аҙашып китеү һәм үҙ-үҙеңде, башҡортлоғоңдо юғалтыу ҡурҡынысы килеп тыуҙы. Ә бит беҙҙең халҡыбыҙҙың меңәр йылдар буйы үҙенең йәшәү рәүеше формалашҡан, шул йәшәү рәүеше, ғәҙәттәребеҙ-йолаларыбыҙ менән бына тигән итеп йәшәгәнбеҙ. Үҙенең 73 йыллыҡ тарихында социалистик ҡоролош кешене диндән, тамырынан, тарихынан айырып, халыҡтарҙы аҙаштырҙы. Бөгөнгө ҡоролош иһә кешене бөтөнләйгә хәйерселеккә төшөрөп, өмөтһеҙлеккә бирелдереп, бер ҡабым икмәк өсөн йәшәргә мәжбүр итә. Шул ваҡытта һәр кемдә, шул иҫәптән, миндә лә шундай һорау тыуа: минең ғорурлығым, минең башҡортлоғом, минең тамырҙарым ҡайҙа һуң бөгөн? Ябай ғына миҫал. Халҡыбыҙҙың үҙенең милли кейемдәре, аштары булған, үҙенә генә хас балалар тәрбиәләү, егеттәр тәрбиәләү, ирҙәр тәрбиәләү ысулдары булған. Ә социалистик революция беҙгә ниндәй яҡшы сифаттар өҫтәне, беҙҙе уратып алған милләттәр - урыҫтар, татарҙар, бөтә баҙарҙарҙы тултырған Азия халыҡтары беҙгә ниндәй ыңғай сифаттары менән йоғонто яһаны? Улар мине таный, ихтирам итәме, йә булмаһа, мине тапаймы, юҡ итәме? Бына башҡорт зыялылары үҙенә ошондай һорауҙы бирергә тейеш.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕЛЕВИЗОР ҠАРАУ ҘА...

## насар ғәҙәт

■ Испанияның Валенсия политехник университеты ғалимдары белдереүенсә, улар уйлап тапҡан үҫенсәлекле порошок емеш-еләк һәм йәшелсәне алыштыра аласаҡ. Был яңылыҡ үҫемлек аҙыҡтарының бар файҙалы матдәләрен һаҡларға ярҙам итәсәк, етмәһә, уны әҙерләп торорға кәрәкмәйәсәк. Был порошок бигерәк тә йәшелсә ашарға яратмаған кешеләргә оҡшарға тейеш, ти ғалимдар, сөнки организмға ҡайһы бер витаминдар тап йәшелсә-емеш аша ғына эләгә һәм идеяның авторҙары әйтеүенсә, был порошок организмды кәрәкле матдәләр менән кәрәгенсә тулыландырасаҡ.

■ Һалҡын тейеп ауырығанда сирҙе антибиотиктар менән дауаларға тырышыуҙың файҙаһы юҡ, тип белдерә Италия ғалимдары. Неаполдең Үҙәк клиник госпитале докторы Франческо де Блазио етәкселегендә үткәрелгән тикшеренеүҙәр барышында һалҡын тейҙереү һөҙөмтәһендә киҫкен йүтәл менән яфаланыусы 305 баланы дауалаусы күҙәткәндәр. Беренсе төркөмдө тик антибиотиктар менән генә дауалағандар, икенсеһендә балаларға комплекслы дауа тәҡдим ителгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге балаларҙың йүтәле тиҙерәк үткән. Ғалимдар әйтеүенсә, антибиотиктар йүтәлде дауаламай, ул уны тыуҙырыусы инфекцияларҙы ғына юҡҡа сығара. Шуға ла бала йүткерә икән, уға антибиотиктар бирергә ярамай. Был саҡта организм киреһенсә хәлһеҙләнә, организмда бактериялар күбәйә һәм ауырыу тағы киҫкенләнә төшә.

■ Ғалимдар йөҙҙәрендә миндәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре нығыраҡ була, тимәк, улар остеопороз сиренә бирешмәй. Бынан тыш, бындай кешеләрҙең йыйырсыҡтары аҙыраҡ була һәм шуға ла улар үҙ йәшенән уртаса 7 йәшкә йәшерәк күренә. Әлбиттә, миңле кешеләргә тире яман шеше лә янай, шуға ла уларға табиптар ҡояшта оҙаҡ ҡыҙынырға кәңәш итмәй. Әммә Лондон тикшеренеүселәре миңдәрҙең ыңғай яҡтары күберәк тип иҫәпләй. Ғалимдар хәҙер миңдәрҙең йөрәк һәм күҙҙәр сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшерә.

■ Business Line баҫмаһы яҙыуынса, телевизор кешенең биш йыл ғүмерен ала икән. Статистика һәм мәғлүмәт бюроһы килтергән мәғлүмәттәргә таянып үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙән һуң Австралия белгестәре ошондай һығымтаға килгән. Улар телевизорҙы һирәк йәки бөтөнләй ҡарамаусылар һәм телевизорһыҙ йәшәй алмаусыларҙың сәләмәтлеген сағыштырған. Асыҡланыуынса, 25 йәштән уҙған һәр кеше өсөн телевизор алдында үткәрелгән бер сәғәт ғүмерҙең 22 минутын юҡҡа сығара. Уртаса кеше көнөнә алты сәғәт телевизор ҡарай, ул үҙенең ғүмерен 5 йылға ҡыҫҡарта, тигән һүҙ. Ғалимдар фекеренсә, даими рәүештә телепрограммалар ҡарау организмға тәмәке тартыу, пассив тормош рәүеше алып барыу, артыҡ ашау килтергән эффекттарға тиң. Әйткәндәй, яңыраҡ Гарвардта ошондай уҡ тикшеренеүҙәр үткәрелгән һәм унда ла ошондай уҡ һығымталар яһалған. Был телевизорҙан бөтөнләй баш тартырға кәрәк, тигәнде аңлатмай, ти табиптар, әммә сама белергә кәрәк.

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ТЕЛҺЕҘ ХАЛЫҠТЫҢ...

## йәшәү сиктәре лә тарая

**Үҙенә лайыҡлы алмаш быуын тәрбиәләй алған халыҡ ҡына киләсәге булыуына өмөтләнә ала. Ә ул быуын ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш һуң? Әлбиттә, халҡының тарихын, йола-ғөрөф-ғәҙәттәрен, туған телендә уҡый, яҙа, һөйләшә белергә, милли үҙенсәлектәрен һаҡларға тейеш.**

Бына ошондай быуын тәрбиәләүҙе үҙенең төп маҡсаты итеп билдәләгән дә инде беҙ яратып уҡыған "Киске Өфө" гәзите. Фәҡәт шул маҡсатта, бөгөнгө тормоштағы тәрлө хәл-ваҡиғаларҙы аңлайышлы, йоғонтоло итеп уҡыусыһына еткереү менән бер рәттән, гәзит үткәндәрҙән фәһем, тәжрибә, ғибрәт алырлыҡ мәғлүмәттәр бирә, әҙәбиәт, мәғрифәт, мәҙәниәт, сәйәсәт өлкәләрендәге темаларҙы яҡтыртҡанда ла иғтибарҙы күберәк йәш быуынды тәрбиәләүгә йүнәлтеү кәрәклеген аңғарта, өндәй һәм хуплай. Милләттәштәрем бындай әүҙем эшмәкәрлекте кинәнеп баһалай һәм кәнәғәттер, тип ышанам.

Ниндәй генә ҡатмарлы осорҙа йәшәһә лә, милләт өсөн алмаш быуын тәрбиәләүҙең ни тиклем мөһим икәнен үҙем шаһит булған бер тәбиғәт күренешендә генә аңғартып үткем килә. Тыуған йортом ҡаршыһында ғына, Таулы йылғаһының арьяғындағы текә тау битендәге ҡаяла мин иҫ белгәндән бирле яңғыҙ ҡарағай үҫте. Үҙ аллы ҡапҡанан сығып китер йәшкә еткәс, яҡты донъяны күргәндән алып зиһенемдә биләгән шул ҡарағай төбөнә барғанмындыр. Ауылдан сығып киткәс тә ҡайтҡан һайын уның эргәһенә барып, хәлен белешеп йөрөнөм. Ул мине ҡаяларға йәбешеп үҫкән тамырҙарының йәшәү көсө менән ғәжәпләндерә, һоҡландыра һәм мәңге йәшәр кеүек тойола ине, сөнки йылдар үтеү менән ҡая таштары ярылып-ярсылып, ишелеп төштө, ә ҡарағайҙың тамырҙары тәбиғәт шарттары һынаған һайын ҡаяға нығыраҡ йәбеште, йәнселеп, тапалып бөтһәләр ҙә, таштарҙан да нығыраҡ булып сыҡтылар. Ләкин бер мәл ҡарағай ҡоланы... Был хәл донъяла бер нәмә лә мәңгелек түгел икәнен тағы бер тапҡыр аңғартып, һабаҡ бирһә лә, йәнемдә тетрәндермәне. Аңымды һәм йәнемде, быға тиклем уйламаған, әһәмиәт бирмәгән икенсе хәл тетрәндерҙе. Бәхетһеҙ, ҡарағайҙың тәгәрәшеп ятҡан тубырсыҡтарын тапап, тамырҙарын ҡапшап, аяуһыҙ һынауҙарға бирешмәй йәшәүенә һоҡланып йөрөгәндә, уның эргә-тирәһендә бер бөртөк тә йәш үҫентеһе юҡ икәненә бөтөнләй иғтибар итмәгәнмен икән. Был ни хикмәт? Тубырсыҡтары ҡая ярыҡтарында, ҡая аҫтында йылға ярына тиклем төшөлеп ятты, иң тос, етлеккәндәре һыуға тәгәрәп барып етеп, әллә ҡайҙарға ағып китте. Ләкин Таулы йылғаһының Һаҡмарға ҡойған еренә тиклемге 10 саҡрым тирәһендәге яр буйҙарында ла бер бөртөк тә ҡарағай үҫмәй. Гәжәп түгелме? Тимәк, ҡарағай йәшәү дәүерендә бөтә көс, хәл, дәрт, ғәйрәтен фәҡәт үҙенең именлеген, йәшәү һәләтен һаҡлау өсөн сарыф иткән, тип фаразларға була. Шул сәбәптәндер, орлоҡтары етлекмәгән, етлеккәндәре - йылға буйындағы уңдырышлы ергә төшкәндәре лә, ағып киткәндәре лә, ят мөхиттә үҫеп сыҡмаған...

Беҙҙең йәмғиәтебеҙ ҙә бөгөн шул йәшәү рәүешен кисерә, шул яҙмышты ҡабатлай түгелме? Һуңғы 10 йылда ғына, илебеҙ бер ниндәй ҙә афәт, ҡаза күрмәгән мәлдәрҙә, халҡыбыҙ һаны 89 мең кешегә кәмегән. Ярай, ситтә йәшәгән 400 меңдән ашыу башҡорттоң 40 меңе эҙһеҙ юғалыуы менән килешмәгәндә лә, уны нисектер аңлатып булһа ла, үҙ республикабыҙҙа милләттәштәребеҙҙең 49 меңе юҡҡа сығыуын аңлауы ҡыйын. Бәлки, ҡатнаш никахтар, бәлки, туған телде уҡытыуға ҡамасаулауҙар, бәлки, үҙебеҙҙең вайымһыҙлыҡ сәбәптәр был хәлгә? Кем асыҡлар был хәтәр хәлде, кем аныҡ ҡына баһа бирер? Ер йөҙөндәге 162 илдә йәшәгән 7 млрд. халыҡты тәшкил итеп 6300 телдә һөйләшкән 5 мең милләттең 380-ененң генә һаны 1 миллиондан күберәк. Шул иҫәпкә инһәк тә, бөгөн башҡорт теле БМО, ЮНЕСКО тарафынан юғалыу хәлендә булған телдәр иҫәбенә индерелгән, сөнки 1 млн 485 мең 554 башҡорттоң яртыһы ғына туған телендә уҡый, яҙа, һөйләшә белә!

"Теле ярлыланған халыҡтың рухиәте менән бер рәттән, йәшәү сиктәре лә ҡыҫырыҡлана", тип әйткән бөйөк Ломоносов. Телебеҙгә генә түгел, еребеҙгә һәм рухиәтебеҙгә ҡаныҡҡандар үҙ фекерҙәрен бөгөн һис тартынмай, йәшенмәй әйтәләр. Был аяныслы хәл үҙен башҡорт тип иҫәпләгән һәр кемде уйландыра, борсолдорамы? "Киске Өфө" гәзите көрәштәребеҙҙең аңына шул уйланыу, борсолоуҙарыбыҙҙы даими еткерергә тырыша, ғәмһеҙлектән арынырға саҡыра, яҡшы тәрбиә һабаҡтарын һеңдерә. Ғөмүмән, йәмғиәтебеҙҙең йәшәйешен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, мәғрифәтен, тарихын һәм социаль үҫешен сағылдырған, илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың йөҙөн билдәләгән, киләсәген хәстәрләгән, милли идеяһы, асыҡ маҡсаты булған киң мәғлүмәтле, мәрхәмәтле, иманлы, абруйлы әҙәби, ижтимағи һәм сәйәси баҫма ул һәм уның киләсәктә лә шулай булыуына ышанам. Ижади уныштар һеҙгә, туғандар!

**Урал МОСТАФИН.**

# ӘҘЛӘГӘНЕБЕҘҘЕ ТАПТЫҠ...

**XX быуаттың 80-се йылдары аҙағында суверенитет, үҙаллылыҡ яулап күтәрелгәндә бик күп милләттәштәребеҙҙең төптә ойоп ятҡан милли рухы уянды. Рухты уятыуҙа башҡорт телендә даими һәм ваҡытлыса сығарылған гәзит-журналдарҙың йоғонтоһо баһалап бөткөһөҙ булды. Ҡайһы бер баҫмалар ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыла торғайны.**

Шул йылдарҙа республика райондарында бер-бер артлы башҡорт телендә гәзиттәр нәшер ителә башланы. Әммә Өфөлә 100 меңдән ашыу башҡорт йәшәп тә, улар өсөн баш ҡаланың үҙенең башҡорт телендәге гәзите сыҡмауы күптәрҙе уйландыра торғайны. Һәм, ниһайәт, берҙәм уй менән янған милләттәштәребеҙҙең изге уйтеләктәре тормошҡа ашты. Асфальтты ярып сығып донъяға баҡҡан сәскә шикелле булды "Киске Өфө" гәзите ойошторолоу, ул баш ҡаланы ғына түгел, ә бөтә башҡорт донъяһын аң һәм ғилем нурына сорнатты. Был күренеште мин үҙем бик оҙаҡ ҡоролоктан һуң тере һыуға сарсаған тәбиғәтте дым менән туйындырған көтөп алынған шифалы ямғырға тиңләйем. Ысынлап та, шулай. Халыҡ араһында "Һин иштеттеңме?", "Күрҙеңме?", "Уҡыныңмы?" тигән һорауҙар ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа, өйҙән-өйгә, ауылдан- ауылға, ҡаланан-ҡалаға таралды. Ул гәзит биттәренән ҡарта ла, йәше лә, түрәһе лә, эшсеһе лә, эшҡыуары ла, эшһеҙе лә эҙләгәнен тапты.

Был донъялағы бөтөн матди күренештәр - ҡасандыр кешеләрҙең башында барлыҡҡа килгән уй-ниәттәрҙең тирә-яҡҡа таралып, күп кешеләрҙең башында эшкәртелеп һәм байытылып, уртаҡ уй булып ойошоу һөҙөмтәһе һәм емеше ул. Ә инде ул емештең тәме, күләме һәм киләсәге ана шул берләшкән уртаҡ уйҙың эшмәкәрлегенә туранан-тура бәйләнгән. Шулай булғас, "Киске Өфө" гәзитенең дә емешле һәм күләмле киләсәге тик үҙебеҙҙең уй-фекеребеҙгә һәм сифатлы эшмәкәрлегебеҙгә бәйләнгән. Әгәр ағас төптәрен йомшартып, шифалы һыу һибеп, ваҡытында ҡарап торһаң, ул һине ҡыуандырып, татлы емештәр бирә. Ә инде ул емештәрҙе ысын күңелдән башҡалар менән уртаҡлашһаң, уның тәмен татыған башҡалар ҙа ул емеште үҫтерә һәм тарата башлаясаҡ. Үҙҙәре һәм башҡалар өсөн шифалы емеш-еләк үҫтереүселәрҙең донъяға ҡарашы һәм уй-фиғеле яҡшы яҡҡа үҙгәрә.

Шулай итеп, беҙ ҙә "Киске Өфө" гәзитенең эргәһендә изге уйҙар менән тупланып, уға күңел йылыбыҙҙы бирәйек. Һәм унан үҙебеҙгә лә файҙалы нурҙар алып, халыҡ араһына таратһаҡ, йәшәү мәғәнәһен тағы ла нығыраҡ аңлай башларбыҙ. Изге уй-фиғелдәребеҙҙең тормошҡа ашыуын үҙ күҙебеҙ менән күреп ҡыуанырбыҙ.

**Айҙар КҮСЕЙ.**

✓ *Тыныслыҡ, тигеҙлек тойғоһо - уңышлы кешенең тағы бер мөһим торошо. Мең йыл элек Боронғо Һиндостанда "Бхагавадгита" китабында, бер ваҡытта ла сиктән сиккә бәргеләнгән тормошҡа ынтылырға ярамай, тиелә.*

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ*

**Яңыраҡ "Киске Өфө" гәзите сығарған "Башватҡыстар, башҡатырғыстар" ҡушымтаһын ҡулыма алып, бик шатландым. Буш ваҡыттарҙа ысынлап та башты эшләтә торған бына тигән ҡулланма килеп сыҡҡан.**

# КИТАП ИТЕП СЫҒАРЫРЛЫҠ




Үҙем менән сумкамда йөрөтәм уны, автобус көткән арала йә юлда китеп барғанда алам да сисә башлайым. Ваҡыттың үткәне лә һиҙелмәй ҡала, унан әүҙем ҡулланылыштан төшөп ҡала барған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе, төрлө төшөнсәләр, атамаларҙы иҫкә төшөрөргә, һүҙ байлығын арттырырға, уйларға, башты эшләтергә ярҙам итә ул. Башватҡыстар сисеүҙең мейе эшмәкәрлеген йәнләндереүҙә, хәтерҙе яҡшыртыуҙағы әһәмиәтен табиптар ҙа таный хәҙер.

"Киске Өфө"нөң был тәжрибәне баҫылып сыға барған башҡа мәҡәләләр буйынса ла дауам итерлек мөмкинлеге бар, сөнки бай тарихи мәғлүмәттәр, билдәле шәхестәр менән "Диалог"тар, "Монолог"тар, халыҡтың рухи аңын күтәреүсе фекерҙәр, ысын мәғәнәһендә аҡыл ҡаҙнаһы туплау, үҙ-үҙеңде камиллаштырыу, сәләмәт йәшәү рәүешенә бағышланған күпме файҙалы һәм фәһемле мәҡәләләр баҫылып сыға был гәзиттә! Уларҙы йыйып ҡына китап рәүешендә айырым туплап сығарыу бик яҡшы эш булыр ине, сөнки гәзит ҡулдан-ҡулға йөрөтөлөп, юғала, туҙа, йыртыла, ә йәтеш кенә итеп эшләнгән китапты һәр ваҡыт үҙең менән йөрөтөргә була. Әйткәндәй, "Киске Өфө"нөң был өлкәлә тәжрибәһе бар инде: Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" һәм "Айыҡ туй сценарийҙары" тигән китаптар тиҙүк таралып та бөттө. Икенсенән, был "Киске Өфө"нө әле һаман алдырып уҡымаған кешеләр өсөн гәзитте рекламалау алымы ла буласаҡ.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА,**
**шағирә.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Киске Өфө" ҡушымтаһы булараҡ "Башватҡыстар. Башҡатырғыстар" гәзитенең беренсе һаны донъя күргәйне. Зөһрә Ҡотлогилдина ошо сығарылыш хаҡында бәйән итә. Бындай форматтағы баҫмалар рус телендә бик күп, әммә башҡорт телендәгеһе беренсе булды шикелле. Ошо хаҡта шағир Дамир Шәрәфетдинов та үҙ фекерен белдерә: "Бик ҙур кинәнес менән һеҙ сығарған "Башватҡыстар. Башҡатырғыстар" гәзитен алдым. Бындай ниәт беҙҙә, "Йәшлек" гәзитендә лә, "Аманат" журналында ла электән үк бар ине, әммә уны тормошҡа ашырыу өсөн дәртме, дарманмы шунда, етмәй ҡалды. Хәҙер беҙҙең редакцияларҙа башҡорт телендәге сканвордтар, кроссвордтар, йомаҡтар һәм башватҡыстар байтаҡ йыйылған, улар әллә нисә сығарылышҡа етер ине. Минең хатта кешеләргә, шул уҡ Илдар Ғәбитовҡа ла, үҙнәшер юлы менән башҡортса сканвордтар йыйынтығы сығарырға ла тәҡдим иткәнем булды. Үҙем дә элек сканвордтар һәм кроссвордтар төҙөү менән етди шөғөлләндем, миндә улар шулай уҡ байтаҡ йыйылған. Ҡыҫҡаһы, бик мәғҡул эш башлағанһығыҙ. Шулай дауам итегеҙ".**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Үлемдән ҡурҡыуҙы еңеү

**Иттән, балыҡтан, йомортҡанан баш тартыуымдың беренсе йылында мин бик ныҡ интектем. Итле ризыҡҡа өйрәнгән организм ғәҙәти аҙыҡ таптырҙы. Ҡайһы бер ваҡытта шул тиклем ауыр була торғайны, мин ит бешкән кәстрүл эргәһенә килеп, яңы тормош рәүешем менән бәхилләшергә лә булып бөтә инем, әммә ҙур ихтыяр көсө ярҙамында ғына итле һөйәкте тартып алыу һәм уға тештәремде батырып, эҫе ит һәм май тәме менән кинәнеү теләгенән тыйылып ҡала торғайным.**

Бөтөн тәнем: "Ал инде, ал! Тештәрең менән май киҫәген умырып ал, артынса бауыр ҡабып ҡуй - барлыҡ интегеүҙәрең, ыҙаларың бөтөр!" - тип ҡоторта. Ләкин түҙҙем: сөнки үҙем теләп ҡабул иткән сикләүҙән саҡ ҡына тайпылыу ҙа мине ҡәбергә илтәсәген белә инем.

Быға тиклем бер йыл элек, 1989 йылдың февралендә, тулыһынса спиртлы эсемлектәр эсеүҙән баш тарттым. Эсмәҫкә, тип алынған йөкләмә минең йәнемде һәм тәнемде цивилизацияның үлемесле йоғонтоһонан һаҡланы. Тап шунан ҡотҡо ҡеүәте һәм минең кешелек "мин"ем араһындағы көрәштең алғы һыҙығы үтә ине. Ә вегетарианлыҡҡа күсеү йәнем һәм аңым аша икенсе оборона һыҙатын һалды. Шуны аңланым: ошо оборона линияһы өҙөлһә, ҡеүәтле көстәр шунда уҡ алғы оборона һыҙатын да юҡҡа сығарасаҡ һәм мин ҡабат спиртлы эсемлектәр эсә башлаясаҡмын.

1990 йылдың октябрь-ноябрендә, аскеттарса йәшәү рәүешен башлағандан һуң, тормошомда киҫкен мәлдәр кисерҙем. Ағарғандан ағара барҙым, һәм был аҡ төҫ ниндәйҙер кимәлдә зәңгәр сағылыш бирҙе. Минең шул ваҡыттағы төҫөм айыртылған һөт төҫөн хәтерләтә ине.

Ауырлығымды юғалта башланым. Өс-дүрт аҙнаға бер тапҡыр температурам күтәрелде. Сәғәттәр буйы диванда, үҙ-үҙемде ҡосаҡлап, сайҡалып ултыра торғайным. Диван шығырлап, ҡатыным һәм балаларым уянмаһын өсөн хәрәкәттәремде яй эшләргә тырыштым. Бер ваҡытта ла градусник ҡуйманым. Температура бағанаһы 41 йәки 42-не күрһәтер ҙә, паникаға бирелеп, "тиҙ ярҙам" хеҙмәтен саҡыртырмын, тип ҡурҡтым.

Бер ваҡыт элекке эш урыныма килеп, корректорҙар менән һөйләшеп торғанда, оло ғына журналист килеп инде. Ниндәйҙер ҡағыҙҙы ҡалдырғас, эргәмдән үтеп барышлай: "Самат, кисекмәҫтән элекке тормош рәүешеңә ҡайт. Башҡорттар меңәр йылдар ит ашаған. Ул бөгөн дә төп туҡланыу ризығы булып ҡала. Беҙҙең, башҡорттарҙың, ит менән туҡланыу ғәҙәте ген кимәлендә һалынған. Туҡланыу рационыңа яйлап итте индерә башларға кәңәш итәм, һәм барыһы ла үҙ урынына ултырыр. Әгәр ҡаршылашһаң - үлерһең. Был хаҡта мин һинең йөҙөңдөң төҫөнә ҡарап һиҙенәм", - тине.

Өйгә ҡайтҡас, йөҙөмдө ентекләп ҡараным. Ысынлап та, ул саманан тыш аҡ ине. Күҙҙәрем ҡайҙалыр төпкә батҡан һәм ҡара ҡулса менән уратылған. Ҡабаҡтарым һәленеп төшкән, танауым ослайған, хатта танау бүлкәһе беленеп тора. Көҙгөнө ситкә алып ҡуйып, ныҡлы уйландым. 44 йәшендә вафат булған атайымды, йәш кенә көйҙәренә баҡыйлыҡҡа күскән ике туғанымды иҫемә төшөрҙөм һәм... үлергә ризалаштым.

Тап ошо ҡарар ғүмеремде һаҡлап ҡалды ла инде. Мин үлемдән ҡурҡмай башланым. Һәм ошо фундаменталь ҡурҡыуҙың булмауы мине тәүәккәл һәм ҡыйыу итте. Эйе, мин үҙемә шундай белдереү яһаным: "Кеше менән буласаҡ иң ҡурҡыныс нәмә - ул үлем. Әммә үлем бары тик был тормоштоң ауырлыҡтарынан һәм ыҙаларынан ҡотолоуҙы ғына аңлата. Шулай булғас, нимәнән ҡурҡырға? Ә ҡатының, балаларың менән ҡасан да булһа айырылышырға тура киләсәк. Һин бит кем менәндер поезда бер купела бараһың, дуҫтарса бәйләнеш булдыраһың, әммә уның менән ниндәйҙер станцияла айырылышаһың. Һинең барлыҡ туғандарың һәм дуҫтарың - бары тик тормош тип аталған поездағы юлдаштар ғына".

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Юғалған үҙидара сәнғәте

**Үҙәктә "йөрәк" тора. Әгәр тормоштан нимә теләүегеҙҙе ныҡлап, ентекләп уйлаһағыҙ, өсмөйөштөң ошо урыны һеҙҙең йортоғоҙға әйләнәсәк. Һәр секундығыҙ ошо "йөрәк"тә үтәсәк. Шул ваҡытта инде тормошоғоҙ ҙур әһәмиәткә эйә буласаҡ, аңығыҙҙың, тәнегеҙҙең, характерығыҙҙың ысын хужаһына әүереләсәкһегеҙ.**

Һеҙ шул саҡта мөмкин булмаған бер нәмә лә юҡ икәнен аңларһығыҙ. Әгәр тормошоғоҙҙоң сикһеҙ мөмкинлектәренә ныҡлы инанып, уға ныҡлы иғтибар туплаһығыҙ, тиҙҙән яңы фекерләү кимәленә сығып, хыялығыҙға етерһегеҙ. Был урын һайланмыш кешеләр өсөн генә түгел, был урын һеҙҙеке лә, үҙ тормошон ғәҙәти ер тормошонан юғарыраҡ күтәреүсе башҡалар өсөн дә. Был - хыялдар һәм теләктәр тормошҡа аша торған урын.

Үҙегеҙ менән идара итеү өсмөйөшөн өйрәнегеҙ һәм үҙегеҙҙе ошо өсмөйөштөң эсендә йәшәүгә бағышлағыҙ. Ул һеҙҙең тормошоғоҙҙо яйға һалып ҡына ҡалмаҫ, ә уны хыялығыҙ, тормош принциптарығыҙ буйынса ҡорорға ярҙам итер.

Үҙеңә идара итеү өсмөйөшө принциптары менән йәшәү - тормош рәүеше генә түгел, ә уны дөрөҫ итеп ойоштороуҙың берҙән-бер һөҙөмтәле ысулы. Был тормошта юғары ҡаҙаныштарға, маҡсатына өлгәшкән теләһә ниндәй кешенең биографияһын өйрәнһәк, уларҙың өсмөйөш принциптары буйынса йәшәүен күрербеҙ. Был - үҙ ваҡытыңды ойоштороу схемаһы ғына түгел, был - үҙ тормошоң менән идара итеү схемаһы. Һөҙөмтәле һәм файҙалы тормоштоң алтын ҡағиҙәһе бик ябай: ваҡыт менән идара итеү - тормош менән идара итеү ул. Ваҡытығыҙҙы һаҡлағыҙ, сөнки ул һеҙҙең иң ҡиммәт милкегеҙ. Джон Кеннеди, Брюс Ли, Исаак Ньютон - барыһы ла тәүлектә һеҙҙең ваҡытығыҙ кеүек үк ваҡытҡа эйә булған. Һәр яңы көн - яҙмыштың 24 сәғәтлек бүләге. Еңеүселәр еңелеүселәрҙән бары тик ошо ваҡытты нисек үткәреүе менән генә айырыла.

Тыныслыҡ, тигеҙлек (равновесие) тойғоһо - уңышлы кешенең тағы бер мөһим торошо. Шуға күрә тыныслыҡта йәшәү мөһим. Мең йыл элек Боронғо Һиндостанда "Бхагавадгита" китабында, бер ваҡытта ла сиктән сиккә бәргеләнгән тормошҡа ынтылырға ярамай, тиелә. Һәр кем уртасалыҡ һәм үҙ ҡеүәтен тормошҡа ашырыуҙың көслө теләге араһындағы тигеҙлекә ынтылырға тейеш. Һәр саҡ тормош маҡсатына төбәлгән ҡараш менән йәшәһәгеҙ, бер ваҡытта ла тигеҙлегегеҙҙе юғалтмаясаҡһығыҙ һәм тирә-яҡ мөхит бүләк итергә һәләтле шатлыҡтарҙан һәм ҡәнәғәтлектән бер ваҡытта ла үтеп китмәҫһегеҙ. Беренсенән, маҡсатҡа өлгәшеү процесынан да ҙурыраҡ ҡәнәғәтлек юҡ. Икенсенән, тормош маҡсатығыҙ, тигеҙлекте тотоу өсөн, ныҡлы, етди уйланылған булырға тейеш. Мәҫәлән, тормош тәғәйенләнешегеҙ буйынса мажараларға әүәҫ булғанда ла, шул уҡ ваҡытта тыныс һәм баҫалҡы кеше булып ҡалырға тейешһегеҙ. Ныҡлы уйланылған тормош планы һеҙҙе кәрәкле юлдан тайпылдырмаҫ, шул уҡ ваҡытта гармониялы шәхес булып ҡалыу мөмкинлеге лә бирер.

**Робин ШАРМА.**



## 5 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50"Трактир на Пятницкой"
06.00 Новости
06.10 "Трактир на Пятницкой". Продолжение
07.40 "Армейский магазин" (16+)
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
08.55 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома" (12+)
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания" (12+)
13.15 "Звезды против пиратства". Концерт
15.10 "Старики-разбойники"
17.00 "Мавзолей" (16+)
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (16+)
19.00 "Бриллиантовая рука"
21.00 "Время"
21.20 "Обратная сторона луны". Сериал (16+)
23.15 "Мартовские иды". Драма (16+)
01.05 "Парк культуры и отдыха". Мелодрама (18+)
03.05 "Андрей Соколов. Долгая дорога в загс"
04.05 "TERRA NOVA" (12+)

### РОССИЯ 1
